*Әҙәм балаһында ике башланғыс йәшәй. Беренсеһе - изгелеккә, яҡшылыҡҡа өндәгән фәрештәләр башланғысы, икенсеһе - түбән хистәргә тартҡан хайуан башланғысы. Кешегә ихтыяр, һайлау мөмкинлеге бирелеүе уны йә фәрештәләрҙән юғары изге зат итә, йә хайуандарҙан түбәнгә төшөрә. Ураҙа аша нәфсеһенә һәм шәһүәтенә ҡаршы торған, көн дауамында аҙыҡтан баш тартҡан, түбән teләктәрҙе ауыҙлыҡлай алған, ғәйбәттән телен һаҡлаған, ғәҙелһеҙлектән йыраҡлашҡан кеше фәрештә асылын ала.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

3 - 9 АВГУСТ (УРАҒАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№31 (553)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Дөрөҫлөк үҙе генә еңә алмағас,** ярҙамға ялғанды саҡырған, ти



3

**Ғәбдүктәрҙең берҙәмлеген...** башҡаларға ла йоҡторорға ине



6

**"Уллы булһаң, болло булырһың",**



8-9 тигән фекерҙә Бохарбаевтар

**Эскәнһең икән...** ҡайт та ят!



12

14 ТВ-программа


## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Ниһайәт, ил етәкселеге милли сәйәсәткә йөҙ бороп, халыҡтар дуҫлығын нығытыуға тотонмаҡсы. Совет заманындағы берҙәмлекте ҡайтарып булырына ышанаһығыҙмы?



**Риф ИСӘНОВ, "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге рәйесе:** Республикабыҙҙа, шөкөр, милли мәсьәлә Рәсәйҙең башҡа ҡайһы бер төбәктәрендәгесә киҫкен тормай, тип әйтер инем. БР Халыҡтар дуҫлығы йорто эшләй, унда төрлө милләт вәкилдәре ҡатнашлығында халыҡтарҙың боронғо йола һәм традициялары, мәҙәни мираҫ өлгөләре тергеҙелә, йыл һайын "Наурыз" байрамы үткәрелә - ул халыҡтарҙы бергә туплауҙа, милләт-ара дуҫлыҡты нығытыуҙа айырыуса ҙур әһәмиәткә эйә. Башҡортостан халыҡтары ассамблеяһы Советы 30-ҙан ашыу милли-йәмәғәт ойошмаларын берләштерә. Рәсәй Хөкүмәте тарафынан раҫланған әлеге халыҡтар дуҫлығы планындағы һәр төрлө этник-мәҙәни байрамдар, фестивалдәр, милли мәсьәләләр буйынса семинарҙар, кәңәшмәләр Башҡортостаныбыҙҙа күптән һәм ярайһы уңышлы ғәмәлгә ашырылып килә инде. Әгәр Рәсәй күләмендә лә ана шундай йүнәлештә эш алып барылған хәлдә, был мәсьәлә бөтөн киҫкенлегендә көн тәртибенә килеп баҫмаған да булыр ине, бәлки. Рәсәй Федерацияһының Милли мәсьәләләр буйынса министрлығы кеүек берәй ведомство булдырыу кәрәклеге хаҡында ғына ла күпме һүҙ барҙы инде! Тик ил етәкселеге тарафанан уға тейешле иғтибар бирелмәне, ә ошо нигеҙҙә йыйыла барған проблемалар һаман тәрәнгәрәк үтеп инеүен дауам итте. Уйлап ҡараһаң, дәүләт милли сәйәсәте илдең нигеҙ ташын тәшкил иткән иң беренсел мәсьәләләрҙең береһе булырға тейеш һәм эште тап шунан башларға кәрәк ине лә бит...

Халыҡтар дуҫлығы өлкәһендә тап совет йылдары осорондағы күсермәгә ҡайтыуҙың кәрәге юҡтыр, сөнки ул ваҡыттарҙа ла бөтәһе лә ал да гөл булманы, күп нәмә партия баҫымы менән, яһалма һәм күҙ буяу өсөн башҡарылды, ә бит милли сәйәсәт - ул бик нескә мәсьәлә. Әлеге көндә күп нәмәләр, ҡараштар үҙгәрҙе, шуға халыҡтар берҙәмлеге программаһында бөгөнгө шарттар иҫәпкә алынып, реаль мәсьәләләр ҡаралырға тейеш, тип уйлайым. Әйткәндәй, аҫаба халыҡтар хоҡуҡтарының да ошо программала урын алырға хаҡы бар, йәғни күп милләтле республикаға исем биргән төп халыҡ, йәғни, башҡорттарҙың һыйынып йәшәр башҡа ере юҡ, уның иле бәрәү - Рәсәй составындағы Башҡортостан, шуға ла илдең милли сәйәсәтендә урындағы ерле халыҡ мәнфәғәттәренә: уның тарихи-мәҙәни ҡомартҡыларын, телен, ерен һаҡлауға беренсел иғтибар бүленергә тейеш.

(Дауамы 2-се биттә).

## ШАҒИР ҺҮҘЕ




### ӨС ИМАН

*Ташҡайҙарға соҡоп яҙҙым алғыш:*
*Илем, Телем, Ерем... һәр өнөн*
*Йәнем эстәрендә сүкенем дә*
*Күңелемдә бәпләп йөрөнөм.*

*Был донъяһы кемдән ҡалмаған ул -*
*Васыят баҫтым ташҡа өс һүҙҙән:*
*"Илкәйеңә, халҡым, хужа бул да*
*Телкәйеңә баш бул һәм рәхмәтле,*
*Ҡубарылма аслан был ерҙән!"*

*Ташҡайҙарға ҡарғыш яҙманым мин,*
*Төшөндөм ул - Ожмах юҡ ерҙә.*
*Ажар инем, бер аҙ йыуашайҙым,*
*Әммә башым әйелер, әйелһә тик*
*Үҙем алғыш тигән өс һүҙгә.*

*Сөнки беҙгә ҡибла берәү генә,-*
*Башҡортостан тигән ил-ватан.*
*Һелтәйҙәрме ҡамсы, араҡыға*
*Тығалармы башын халҡыбыҙҙың,*
*Ауалармы ырҙәр ҡороҡтан,-*

*Өс усаҡтан ҡыҫыҡ күҙебеҙгә*
*Сарпылыр ҙа осҡон, айнытыр.*
*Илем, Телем, Ерем - шул өс иман*
*Булһа ғына башҡорт халыҡтыр!*

(Шиғырҙарҙы 11-се биттә уҡығыҙ).

✓ Мәскәүҙең Рәсәй төбәктәренә өҫтән, провинция тип ҡарауы, бөгөнгө көнгә тиклем милли мәсьәләләр буйынса министрлыҡ булдырмау - былар үҙҙәре халыҡтар дуҫлығына, берҙәмлегенә ҡаршы һөйләүсе факттар, тип уйлайым.



УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# ШӘХЕСТӘРҘЕҢ... телен сисә беләләр

**"Киске Өфө" гәзитен мин күптән алдырам. Үҙен ысын башҡорт тип һанаусы һәр кем был баҫманы уҡырға тейеш, тип иҫәпләйем. Сөнки ул бөгөнгө көндә милли аңды уятыр, рух ныҡлығы тәрбиәләр берҙән-бер гәзит, тиергә мөмкин.**

Ҡалған баҫмаларҙы ла насарларға теләмәйем, әммә "Киске Өфө"лә уйландырырлыҡ, ниндәйҙер һығымталар яһатырлыҡ сығыштар, мәҡәләләр баҫыла, тип әйтке килә. Был гәзиттең "Диалог", "Монолог" рубрикаларында халҡыбыҙҙың оло-оло шәхестәре, зыялылары менән фәһемле осрашыуҙар урын ала. Ул шәхестәр башҡа баҫмаларҙа ла, радио-телевидение аша ла сығыш яһай ул, әммә бары тик "Киске Өфө" журналистары ғына уларҙың телен сисә, кәрәкле, тос фекерҙәрҙе әйттерә белә.

Уйлай китһәң, гәзитте зыялылар тип аталған кешеләр, уларҙың балалары, Өфө халҡы уҡыймы икән? Уҡығандар булһа, бик хуп. Тик бына мин үҙемдең ауылымда, Учалымда был гәзитте алдырыусылар аҙ булғанға бошонам. Күпме файҙалы мәғлүмәттән, аҡылдан, тос фекерҙән, донъя көткәндә, тормош юлын һүткәндә кәрәкле кәңәштәрҙән мәхрүм был гәзитте уҡымаусылар. Бик ҡыҙыҡлы, фәһемле гәзит ижад иткәндәре өсөн редакция хеҙмәткәрҙәренә рәхмәтлемен.

**Закир ҒАРИПОВ,**
**Учалы районының Науруз ауыл биләмәһе хакимиәте башлығы.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Август аҙағына тиклем уҡыусыларыбыҙға 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 2014 йылдың тәүге яртыһы өсөн 2013 йылғы хаҡтар менән, йәғни 378 һум 36 тингә яҙылыу мөмкинлеге бирелә. Сентябрҙән хаҡтар үҙгәрәсәк.**

● Шулай итеп, август айында 2014 йылдың тәүге яртыһы өсөн гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе тәүге 10 уҡыусыбыҙ - **Ноғман Мусиндың "Алдар батыр"**, 10 уҡыусыбыҙ - **2014 йылға "Башҡортса дини календарь"**, 10 уҡыусыбыҙ **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

● **Әйткәндәй,** 2013 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылырға әле лә һуң түгел: 17 августҡа тиклем яҙылһағыҙ -сентябрҙән, 17 сентябргә тиклем яҙылһағыҙ, гәзитебеҙҙе октябрҙән алдыра башларһығыҙ.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru.** Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru.**

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ниһайәт, ил етәкселеге милли сәйәсәткә йөҙ бороп, халыҡтар дуҫлығын нығытыуға тотонмаҡсы. Совет заманындағы берҙәмлекте ҡайтарып булырына ышанаһығыҙмы?

(Башы 1-се биттә).

***Фирҙәүес БӘШИРОВА, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Ҡаҙан ҡалаһы:*** Халыҡтар дуҫлығы тураһында уйланғанда минең күҙ алдына шундай күренеш килеп баҫа: элеваторҙарҙа әҙер, ҡоро, етлеккән ашлыҡ бөртөктәре - тереклек өсөн аҙыҡ туплана. Тышҡы шарттарға буйһоноп, тын ғына ятһалар ҙа, һәр бөртөк үҙенсә айырым тормош менән йәшәй, һәр бөртөктә киләсәккә программа һалынған. Он итеп тартылһа ла, бөртөк киҫәксәләре таралыусан була. Был осраҡта бөртөктәрҙе уҡмаштырыу, берләштереү кәсә - дым. Империялар, илдәр һәм халыҡтар менән дә шул хәлгә оҡшаш: уларҙың алтын бөртөктәре - халыҡ. Кешеләрҙе ил эсендә туплап, берләштереү өсөн дә тейешле шарттар кәрәк бит. Рәсәйгә килгәндә иһә, башҡа илдәрҙән айырмалы рәүештә, беҙҙә 180 төрлө халыҡ һәм милләт йәшәй, шуға күрә лә, илебеҙ ҡеүәтле һәм тыныс булһын, тиһәк, милли сәйәсәтте юлға һалыу, милли программа иң тәүҙә беҙгә кәрәк. Бөйөк Октябрь революцияһына тиклем Рәсәйҙә халыҡты иҙеү хөкөм һөрә, шуға ла гәҙеллек, ирек, тигеҙлек яулау маҡсаты халыҡты көрәшкә ҡуҙғатҡан - берләштергән. Унан һуңғы йылдарҙа иһә милләттәр дуҫлығы нигеҙенә социалистик республикалар берләшмәһе төҙөү идеяһы һалына. Ана шул берҙәмлек, ойошҡанлыҡ Бөйөк Ватан һуғышында еңеп сығырға ярҙам итә лә инде. Совет йылдарындағы берҙәмлек илебеҙҙең индустрияһын, мәҙәниәтен, мәғрифәтен үҫтереүгә булышлыҡ итте, ил абруйын донъя кимәленә күтәрҙе. Илдең матур киләсәге өсөн халҡыбыҙ йыш ҡына ҡоро энтузиазм менән бушҡа эшләргә лә әҙер ине һәм шулай эшләне лә... СССР-ҙа йәшәгән төрлө милләт халыҡтары Мәскәүҙә үтә торған Бөтә Союз Халыҡ хужалығы ҡаҙаныштары күргәҙмәләрендә, төрлө декада, фестивалдәрҙә әләнән-әле ҡатнашып, үҙҙәренең барлығын белгертеп торҙо. Тик шул уҡ ваҡытта аҫтыртын ғына милләттәрҙе бөтөрөп, бер халыҡ яһау, бер дингә күсереү эше алып барылды. Быны дәлилләгән факттарҙың береһе - ҡатнаш никахтарҙы хуплау һәм арттырыуға ынтылыш ине. Халыҡтарҙың үҙ тарихтарын өйрәнеүгә һәр төрлө кәртәләр ҡуйып, сикләү, цензуралар, төрлө өлкәләрҙә мәғлүмәт ҡытлығы тыуҙырыу, яһалма республикалар төҙөүҙең халыҡтарҙың милләт булараҡ нигеҙен ҡаҡшатыуға йүнәлтелгән булыуын хәҙер асыҡ күрәбеҙ. Һөҙөмтәлә был саралар СССР-ҙың тарҡалыуына килтергән төп сәбәптәрҙең береһе ул. Бөгөн беҙ Рәсәйҙә, бөтөнләй башҡа системала йәшәйбеҙ, хәлдәребеҙ ҙә башҡаса. Үткән менән бөгөнгөнө сағыштыра алабыҙ. Инде 20 йыллап бар: Мәскәү - үҙенсә, төбәктәр үҙҙәренсә көн итә. Кешеләр араһында тигеҙһеҙлек ҡалҡты - илктән иләнәбеҙме ни... Төрлө ҡатламдар барлыҡҡа килде. Халыҡтар тырым-тырағай тарҡалышты, ярлы хәлен бай белмәй, тигәндәй. Ошондай шарттарҙа ниндәй дуҫлыҡ, берҙәмлек хаҡында һүҙ йөрөтөп була икән ул? Бынан тыш, эре һәм бәләкәй халыҡтарға бүлгәләү һаман дауам итә. Был бүленеш үҙе үк халыҡтарҙы айыра бит инде. Дуҫлыҡ, берҙәмлеккә указ, ҡанунадар менән генә әүәләп булырына өмөтөм аҙ минең. Дуҫлыҡтың нигеҙендә бер-береңә ихтирам, итәғәтлек ята. Ә хөрмәт нигеҙендә - уртаҡ хеҙмәт, аңлашып көн итеү, бер-береңә ярҙамға әҙерлек, уртаҡ хыял, тормош, әхлаҡ ҡанундары. Мәскәүҙең Рәсәй төбәктәренә өҫтән, провинция тип ҡарауы, уларҙан байыу сығанағы яһауы, бөгөнгө көнгә тиклем милли мәсьәләләр буйынса министрлыҡ булдырмау - былар үҙҙәре халыҡтар дуҫлығына, берҙәмлегенә ҡаршы һөйләүсе факттар, тип уйлайым. Халҡыбыҙ хәҙер мәғлүмәти бушлыҡтан азат, донъялағы хәлдәр, әйтерһең дә, үтә күренмәле - бөтә хәрәкәттәр анализлана, баһа бирелә. Йәштәрҙе алдатыуы ҡыйын хәҙер, шуға күрә яһалма сараларҙың совет осоронда хөкөм һөргән дуҫлыҡ, берҙәмлек төшөнсәләрен янынан тыуҙырыуына өмөтөм зурҙан түгел. Әммә шуныһы ла бар: һәр хәрәкәттең позитив яҡтарын күрә белеп, уны ил, халыҡ файҙаһына эшләтә белеүҙең дә оло хеҙмәт икәнлеген оноторға ярамай. Эшләтә белгәндә, әлбиттә...

***Фәрхәнә ЧУРАКОВА, Башҡортостандың мәғариф алдынғыһы, Бөрйән районы:*** Республикабыҙҙа 160 төр милләт халҡы йәшәп, әле береһенең дә милли нигеҙҙә тауыш, ғауға күтәргәнен ишеткәнем юҡ һәм ишетергә лә яҙмаһын инде, тип теләйем. Халҡыбыҙ һәр ерҙә, һәр дайым осрап торған бәгзе бер экстремист кәйефле "эшмәкәрҙәр" ығы-зығыһына ҡарамай, үҙ-ара тыныс, лайыҡлы мөнәсәбәттәрҙә йәшәүен дауам итә. Ҡоро һүҙ булмаһын өсөн ошо хаҡта бер нисә миҫал да килтергем килә. Федоровка районының бик матур бер урынында Алыштан тигән ауыл бар. Исеменең тарихы былай, тиҙәр: батшаға тоғро хеҙмәт иткән мордваларҙы батша ал ыштан менән бүләкләгән һәм башҡорт ерҙәренән урын бүлеп биргән. Мордвалар үҙҙәрен фин-угыр төркөмөнә ҡараған халыҡтарҙың береһе тип иҫәпләй. Ошо ауылға килгән тәүге башҡорт теле уҡытыусыһы буларак, урындағы халыҡты яҡшы беләм.Мәктәптә миңә ихтирамлы, татыу мөнәсәбәт күрһәттеләр. Балаларҙы башҡортса уҡырға, һөйләшергә, йырларға, бейергә өйрәттем. Дәрестә мордва балалары "Аманат", "Аҡбуҙат" журналдарын яратып уҡый ине, ғөмүмән, улар башҡорт телен ихлас өйрәнде. Мине ошо ауылда йәшәгән Ғайсаров тигән башҡорт фамилияһын йөрөтөүсе мордва ғаиләһе тарихы һоҡландырҙы. Ә тарихы уның шулай: һуғышта башҡорт менән мордва айырылмаҫ дуҫ булғандар, бер ҡалактан ашап, бер шинель ябынып йоҡлағандар. Яуға ингәндә, беребеҙ үлеп, беребеҙ иҫән ҡалһа, фамилиябыҙҙы алмашырбыҙ, тип һүҙ бирешкәндәр. Башҡорт шул яуҙа һәләк була, ә мордва иптәшенең фамилияһын алып, тыуған яғына ҡайта. Икенсе төрлө тарихы ҡыҫҡаса шулай: 1903 йылда тыуған Федор Антоновичты бәләкәй сағынан Ғайсаров тигән бер башҡорт үҙ улы кеүек тәрбиәләп үҫтерә, уҡыта, үҙ фамилияһын бирә. Шунан башланып китә лә инде мордва Ғайсаровтар ғаиләһенең шәжәрәһе. Улар ауылда бер нисә ғаилә хәҙер: Зинаида, Николай, Алексей Ғайсаровтар. Мине иң һоҡландырғаны: ошо ғаиләләрҙең бер төптән ғорурлыҡ менән башҡорт фамилияһын йөрөтөүҙәре."Ҡайҙа барһаҡ та беҙҙе башҡорттар тип ҡабул итәләр", тип һөйләргә ярата улар. Ошоға оҡшаш күренештәр, йәғни беҙҙәге халыҡтарҙың эскерһеҙ берҙәмлегенә миҫалдар, һәр ауылда тиерлек осрап тора. Башҡорттар төйәге быуаттар буйына күп милләтле республикаға әйләнде. Бөйөк Ҡөҙрәт эйәһе Үҙе, күрәһең,шулай ҡушҡан. Беҙҙең аҫаба еребеҙҙә башҡортҡа ла, урыҫҡа ла, мордваға ла - барыһына ла бер күк аҫтында берберенә һыйынышып, бер һауаны һулап, бер ил-көнлөк булып йәшәргә насип булған, сөнки Аллабыҙ бер беҙҙең, гәрсә инаныуҙарыбыҙ төрлөсә булһа ла. Был дуҫлыҡты бер указ да, бер сәйәсәт тә ҡаҡшата алмаҫ, тип ышанырға ғына ҡала.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Республика Президенты Рөстәм Хәмитов эш сәфәре менән Сибайҙа булды. Бында ул ағас эшкәртеү һәм ағас әйберҙәр етештереү буйынса махсуслашҡан "СибайЛесПром" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенә, асфальт-бетон ҡатнашмалары өсөн компоненттар етештереүсе "Технострой" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенә, "Учалы тау-байыҡтырыу комбинаты" асыҡ акционерҙар йәмғиәтенең Сибайҙағы филиалына, "Зауральский теплоблок" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенә барҙы, 55 фатирлы күп ҡатлы йорт төҙөү барышы менән танышты, яңы төҙөлгән "Әкиәт" балалар баҡсаһында булды.

✓Сибай буйлап эш сәфәре барышында Рөстәм Хәмитов урындағы халыҡ менән аралашты. Ҡаланы тәҙҡиләндереүгә бәйле төрлө мәсьәләләр тикшерелде. "Сибай гимназия-интернаты" дәүләт бюджет белем биреү учреждениеһы директоры Роза Бикбова Президентка һорау менән мөрәжәғәт итте. Билдәләнеүенсә, Ҡулланыусылар хоҡуғын һәм кеше именлеген яҡлау өлкәһендәге күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең БР буйынса идаралығы май айында учреждениеға майҙандың нормативтарға ярашлы булмауы тураһында бойороҡ йүнәлткән. Был мәсьәләне үҙ аллы хәл итеү мөмкин түгел. Гимназия-интернатта республиканың ете районынан 280 бала уҡый. Президент мәсьәләне хәл итеүҙә ярҙам күрһәтергә һүҙ бирҙе.

✓Башҡортостан Президенты Өфө ҡалаһы Ленин районының Затон биҫтәһендәге төньяҡ урау автомобиль юлын төҙөү барышы менән танышты. Төҙөлөш эштәре 2006 йылдың майында башланған. Эштәрҙең бер өләшө тамамланған, әлеге ваҡытта төҙөлөштөң беренсе сиратын Өфө милкенә тапшырыу процесы рәсмиләштерелә. Эштәрҙе "Башкиравтодор" асыҡ акционерҙар йәмғиәте" генераль подряд ойошмаһы башҡара. Төҙөлөштөң икенсе сираты буйынса төҙөкләндереү эштәрен башҡарырға ҡалған.

✓Республика етәксеһе Ағиҙел йылғаһы аша төҙөләсәк күпер проекты менән танышты. Яңы күпер Ағиҙел йылғаһы аша үткән автомобиль күперенән 40 метр өҫтәрәк урынлашасаҡ. Уның оҙонлоғо - 836 метр, киңлеге 14 метр тәшкил итәсәк. Төҙөлөш эштәрен ағымдағы йылдың сентябрендә башлау планлаштырыла. Өс йылдан объектты файҙаланыуға тапшырыу ҡарала.

✓ *Тәүге йылда улар яңы донъяға килгән ун ике мең ир сабыйҙы һәләк иткән. Ҡайһы бер сығанаҡтарҙа етмеш мең сабыйға ҡул һалыныуы хаҡында мәғлүмәт һаҡланып ҡалған.*



МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# ДӨРӨҪЛӨК ҮҘЕ ГЕНӘ ЕҢӘ АЛМАҒАС,

## ярҙамға ялғанды саҡырған, ти

**Был әйтем бик күп ҡапма-ҡаршылыҡлы фекерҙәр тыуҙыра. Ни өсөн тигәндә, нимә-нимә, дөрөҫлөк йәки хәҡиҡәт өҫкә сығыр өсөн ялғанды, алдыҡты ярҙамға саҡыра буламы инде? Был осраҡта дөрөҫлөк йәки хәҡиҡәт үҙе үк ялғанға әүерелмәйме ни? Һыуға төшкәндән һуң ҡоп-ҡоро сығып буламы? Ҡыҫҡаһы, был әйтемгә һалынған төп мәғәнәгә ҡаршы әллә күпме контр-дәлил килтерергә мөмкин булыр ине. Шуға күрә лә беҙ был хаҡтағы бәхәскә юл ҡуймаҫ өсөн Муса бәйғәмбәр хаҡында бер риүәйәт кенә һөйләп үтәйек әле, булмаһа. Бәлки, әйтемгә яуап тап унда табылыр.**



Яуызлығы менән дан алған, Аллаһы Тәғәләне танымаған Фирғәүен бер саҡ төшөндә кемдәндер: "Тиҙҙән бер малай донъяға киләсәк, ул һинең батшалығыңды туҙҙырып, бар байлығыңды тартып аласаҡ", - тигән һүҙҙәр ишеткән. Икенсе көнөндә уның төшөнә бер егет ингән. Егет арыҫланға атланып килгән дә, уның башына таяҡ менән һуғырға тотонған һәм Фирғәүенде диңгеҙгә ырғытҡан. Ҡото алынған Фирғәүен һарайына донъяның барлыҡ төш юраусыларын саҡыртып, ике көн рәттән күргән төшөн юратырға бойорған. Төш юраусылар Фирғәүендең яҙаһынан ҡурҡып, уйланыр өсөн ваҡыт һораған. Өсөнсө төндә күргән төшөндә инде әлеге егет Фирғәүендең башына һуйыл менән һуға-һуға: "Һин ниңә Аллаһы Тәғәләнән оялмайһың?"-тип әйтә икән.

Ҡото алыныуҙан шартлар сиккә еткән Фирғәүен шундуҡ төш юраусыларҙы тағы ла саҡыртып, тегеләргә мәсьәләне ҡабырғаһы менән ҡуйып: "Йә һеҙ мине алдағы көндәрҙә нимә көткәнлеген әйтәһегеҙ, йә мин һеҙҙең барығыҙҙы ла үлтерергә бойорам", -тигән. Тик ошонан һуң ғына төш юраусылар нимә уйлағандарын әйтеп биргән: "Тиҙҙән бер малай донъяға киләсәк. Ул һинең батшалығыңды туҙҙырып, бар байлығыңды тартып аласаҡ. Ул малай үҙен бәйғәмбәр тип раҫлаясаҡ. Һиңә һәм ырыуыңа һәләкәт тап шул малайҙан килəсәк..."

Был һүҙҙәр Фирғәүендең тәүге төшөндә ҡолағына салынған һүҙҙәрҙең тулы рәүеше булғас, ул төш юраусыларға ҡағылмаған, дөрөҫөрәге, уларға тейергә ҡурҡҡан.

Бик ҡаты уйға сумған Фирғәүен. Вәзирҙәре уға һәр яңы тыуған малайҙы үлтереп барырға кәңәш биргән. Шулай итеп, хакимдың айырым төркөм ярҙамсыларына ауырлы ҡатындарҙы иҫәпкә алырға, уларҙы күҙәтергә ҡушылған. Тәүге йылда улар яңы донъяға килгән ун ике мең ир сабыйҙы һәләк иткән. Ҡайһы бер сығанаҡтарҙа етмеш мең сабыйға ҡул һалыныуы хаҡында мәғлүмәт һаҡланып ҡалған.

Фирғәүендең был ҡәбәхәтлегенән ил халҡы зар илаған. Бигерәк тә сабыйҙары һәләк ителгән ҡатын-ҡыҙҙар һис тыйып булмаҫлыҡ иңрәүгә төшкән, улар ауырға ҡалған һайын ҡыҙ бала тыуыуын теләп, Хоҙайға ялбарған. Йыл һайын ир балаларҙы үлтереп тороу илдә эшсе ҡулдар етешмәүгә килтергән. Ир балалар булмағас, ҡатын-ҡыҙҙар кейәүгә сыға алмаған һәм батшалыҡ демографик көрсөккә терәлә барған. Фирғәүен ил халҡы кәмей барып, батшалығы бөтөнләй ирҙәрһеҙ, йәғни эшсе ҡулдарһыҙ һәм һалдатһыҙ тороп ҡалмаһын өсөн тәүге ҡарарына төҙәтмә индергән: хәҙер инде йыл аша, йәғни бер йылда тыуғандарға бөтөнләй теймәйенсә, икенсе йылында донъяға килгән ир сабыйҙарҙы ғына үлтерә башлағандар. Тап шул йылдарҙа бер ҡатын малай тапҡан, улына Һарун тип исем ҡушҡан. Уның кендек инәһе булған ҡатын сабыйҙың нур сәсеп тороуын һәм ике күҙенең араһындағы билдәнене күргән. Әммә ул был хаҡта берәүгә лә әйтмәгән, тик әсәһен генә малайҙың ябай кеше булмауы, шуға күрә уны ныҡлап һаҡларға кәрәклеге хаҡында иҫкәрткән. Темеҫкенеп йөрөүсе Фирғәүен кешеләренең бер мәл уларҙың йортона инеп килеүен күргән әсә Һарунды ҡурҡышынан янып ятҡан мейес эсенә йәшерә. Тегеләр бер сабыйҙы ла таба алмағас, китеп бара. Әсә кеше мейескә күҙ һалһа, малайының янған ут эсендә йылмайып ятҡанын күрә, Аллаһы Тәғәлә янып торған мейес эсен ожмахҡа әүерелдереп, уны һаҡлап ҡалған икән.

Ошонан һуң әсә кешенең йөрәгенә шом инеп ултыра. Күңеленә шундай уйниәт килә: сабыйын һаҡлап ҡалыр өсөн һандыҡ эсенә һалып, Нил йылғаһы буйлап ағыҙып ебәрергә. Ул шулай итә лә.

Тап шул мәлдә Фирғәүендең берҙән-бер ҡыҙы махау (проказа) менән ауырый башлай. Ул ҡыҙын донъяның иң маһир табиптарына, өшкөрөүселәренә күрһәтеп ҡарай, файҙаһы булмай. Күрәҙәселәр Нилдан ағып барыусы бер малайҙың төкөрөгө генә уға ярҙам итәсәк тип белдергәс, Фирғәүен ярҙамсыларына тәүлек әйләнәһенә ҡыҙын йылға ярында алып йөрөргә бойора.

Бер мәл ҡыҙ йылға ярында йөрөп ятһа, йылғанан көслө тулҡын уның ҡаршыһына һандыҡ сығарып ултырта. Фирғәүендең хеҙмәтселәре барыһы ла һандыҡ янына йыйыла. Ҡыҙ уның ҡапҡасын асып ебәреп, унда көлөп-йылмайып ятҡан малайға ҡағылыуы була, сире ҡул менән һыпырып алғандай юҡҡа сыға. Ҡыҙ әсәһе Асият янына йүгереп ҡайтып, үҙенең һауығыуы хаҡында һөйөнсөләй. Асият һөйөнөслө хәбәрҙе иренә еткерә. Фирғәүен ҡыҙының һауығыуына ҡыуана, әммә барыбер малай уға оҡшап етмәй. "Теге минең батшалығымды юҡҡа сығара торған малай ул түгелме икән?" - тигән шиген еткерә ул ҡатынына. Ошо һүҙҙәрен әйтеп, ул һаман да малайҙы үлтерергә яҫҡына. Асияттың: "Бәлки, ул малай беҙҙең өсөн файҙалы кеше булып үҫер. Әгәр уны үлтерһәк, ҡыҙыбыҙ тағы ла ауырып китер. Әгәр ҙә һин төшөндә күргән малай булып сыҡһа, уны үлтерергә бер ваҡытта ла һуң түгел", - тигән һүҙҙәре Фирғәүенде йомшарта һәм ул Һарунды үҙ һарайында ҡалдырырға рөхсәт итә.

Асият малайға Муса исеме бирә һәм сабыйҙы имеҙер күкрәк әсәһе эҙләргә тотона. Әммә сабый ул ҡатын-ҡыҙҙарҙың береһен дә имергә теләмәй. Шул саҡта Хоҙайҙың ҡушыуы буйынса сабыйҙы ҡулында тотоп ултырыусы Асият янына Һарун-Мусаның апаһы килеп инә һәм тиҙҙән ул әсәһен алып килә. Үҙ әсәһен күргәндән һуң сабый тағы ла нурға күмелә һәм һулҡылдатып имергә керешә.

Асият сабыйҙы имеҙер өсөн уның әсәһен тағы ла күпмелер ваҡытҡа Фирғәүендең һарайында ҡалыуын һорай. Әммә ҡатын бында ҡала алмауы хаҡында белдереп, сабыйҙы үҙ өйөнә алып ҡайтып имеҙеүҙе һорай. Ул сабыйҙы үҙ өйөндә ике йыл буйына имеҙә һәм кире Асиятҡа ҡайтара...

Риүәйәттең ҡыҫҡаса йөкмәткеһе шулай. Фирғәүен төшөндә күргән малай, ысынлап та, Муса бәйғәмбәр булып сыға. Ул һуңынан үҫеп еткәс, ысынлап та, аллаһыҙ Фирғәүендең батшалығын юҡ итә һәм үҙен дә диңгеҙгә батырып үлтерә. Был риүәйәттең "Дөрөҫлөк үҙе генә еңә алмағас, ярҙамға ялғанды саҡырған", тигән әйтемгә һалынған төп фекерҙе аңлатҡан мәғәнәһе шунда: үҙ бәйғәмбәренең ғүмерен һаҡлап ҡалыр өсөн хатта Аллаһы Тәғәлә лә ошондай юлға барған икән, яуызлыҡҡа ҡаршы көрәшкәндә барлыҡ юлдар ҙа аҡланалыр, тием. Маҡсат ысулды аҡлай, тиҙәр бындай саҡта.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Президенты Мәскәүҙән алып Владимир, Түбәнге Новгород, Ҡаҙан ҡалалары аша Өфөгә тиклем һуҙылған М-7 "Волга" автомобиль юлының республика биләмәһе буйлап үткән участкаһын реконструкциялау барышы менән танышты. Билдәләнеүенсә, тәүге комплекс сентябрҙең икенсе яртыһында файҙаланыуға тапшырыласаҡ. Был участканың дөйөм оҙонлоғо 20 километр тәшкил итәсәк. Юл хәрәкәте ике һыҙатлы буласаҡ, биш юл үткәргес ҡаралған. Трассаны тулыһынса файҙаланыуға тапшырыу 2014 йылға планлаштырылған.

✓ Башҡортостан Республикаһы Президенты Указы менән БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары Рафаил Зиннуров әүҙем ижтимағи-сәйәси эшмәкәрлеге өсөн юғары дәүләт наградаһына - Салауат Юлаев орденына лайыҡ булды.

✓ Башҡортостандың туғыҙ районында ҡайһы бер сәсеүлектәрҙе борсаҡ һуҡҡан. Аҙна эсендә Мәләүез, Әлшәй, Стәрлетамаҡ, Бүздәк, Благовар, Кушнаренко, Яңауыл, Ҡалтасы һәм Асҡын райондарында борсаҡ яуыуы теркәлгән. Иң ҙур борсаҡ бөртөктәре (ҙурлығы 30 миллиметрҙан ашыу) Мәләүез районының метеорология станцияһында теркәлгән. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, ҙурлығы 20 миллиметрҙан ашыу булған борсаҡ яуыуын белгестәр хәүефле күренеш тип иҫәпләй.

✓ Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының Башҡортостан буйынса Баш идаралығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, бөгөнгө көндә аномаль эҫе һауа торошо, ҡоролоҡ, саранча таралыу, борсаҡлы ҡойма ямғыр яуыу сәбәпле ғәҙәттән тыш хәл режимы республиканың 26 муниципаль районында индерелгән. Ә Стәрлетамаҡ районында бындай хәл Наумовка ауыл советының Васильевка ауылы эргәһендә нефть ҡалдыҡтары түгелеү сәбәпле индерелгән.

✓ Башҡортостанда 2013 йылдың 1 авгусынан 2014 йылдың 1 авгусына тиклемге осорға һунар ресурстарын аулауға лимит билдәләнде. БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, һунар ресурстарын аулауҙың максималь лимиты түбәндәгесә: мышы - 1192 баштан, себер ҡоралайы - 775, ҡабан - 8824, һоро айыу - 204, бурһыҡ - 262, һеләүһен 3 баштан артмаҫҡа тейеш.

✔ *Компенсация үҙе бик ябай иҫәпләнә: раҫланған тариф нормативҡа һәм теркәлеүселәр һанына ҡабатлана, килеп сыҡҡан сумманан декабрҙең 1,12-гә ҡабатланған тарифы алына.*



...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ӨФӨ ҘУРАЯ...

## мөмкинлектәр киңәйә

**"Өфө. Генераль планды корректировкалау" проектына ярашлы, ҡаланың тарихи үҙәген, уның боронғо өлөшөн төҙөкләндереү, реабилитациялау менән бер рәттән, баш ҡаланан ситтә - Ағиҙел һәм Ҡариҙел йылғалары аръяғындағы (Забелье, Зауфимье) территорияларҙы үҙләштереү ҙә ҡаралған. Был хаҡта сираттағы матбуғат конференцияһында ҡала округы хакимиәтенең архитектура һәм ҡала төҙөлөшө баш идаралығы начальнигы Илдар Ибраһимов һәм уның урынбаҫарҙары белдерҙе.**

Бөгөн Ағиҙел аръяғында үҙләштереү мөмкин булған территория күләме 173 квадрат километр тәшкил итә. Генплан буйынса бында яңы торлаҡ төҙөлөшө күләме 4 миллион 490 мең квадрат метр буласаҡ, тип күҙаллана, Көнсығыш Затон, Төньяҡ-көнбайыш Затон, Романовка, Бананово, Яңы Александровка, Кустаревск күленән көнсығыштараҡ торлаҡ райондарының планировкаһын проектлау һөҙөмтәһендә был күләм 6 миллион квадрат метрға етәсәк. Ҡариҙел йылғаһы аръяғындағы территория яҡынса 218 квадрат километр тәшкил итә. Бында төҙөләсәк торлаҡтың дөйөм майҙаны 2 миллион 420 мең квадрат метр самаһы буласаҡ. Өфөнөң был яҡ территорияһында Зинино-Нуғай, Жилино, Йылҡыбай-Федоровка-Самохваловка-Базилевка, Көньяҡ Шаҡша райондары киңәйәсәк. Был территорияларҙа һалынасаҡ йорттар, нигеҙҙә, аҙ ҡатлы йәки өс ҡатлы буласаҡ һәм улар барлыҡ инженер селтәрҙәре һәм социаль инфраструктура менән тәьмин ителәсәк.




Әлеге ваҡытта был йүнәлештәргә транспорт инфраструктураһын үҫтереү буйынса саралар комплексын тормошҡа ашырыу мәсьәләләре ҡарала. Быға инде Ағиҙел аръяғындағы территорияла ла, Ҡариҙел аръяғындағы территорияла ла тышҡы һәм ҡала транспорты объекттарын реконструкциялау; транзит һәм йөк транспорты өсөн урау юлдар төҙөү; территория араһында магистралдәр һалыу; төп юлдар һәм тимер юл киҫелештәрендә хәүефһеҙ хәрәкәт тәьмин итеү өсөн юл сиселештәре булдырыу инә.

Әйткәндәй, был территорияларҙы үҙләштереү ваҡыты өс йылға билдәләнгән. Ә инде ундағы торлаҡ, тәү сиратта, социаль йүнәлешле буласаҡ һәм шулай уҡ урта синыфтың мөмкинлеге иҫәпкә алып төҙөләсәк.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# БАРЫҺЫНА ЛА!

## Барыһына ла түгел!

**Башҡортостанда коммуналь хеҙмәттәргә түләүҙәр буйынса хаҡтар артыу һөҙөмтәһендә, улар халыҡтың кеҫәһенә ҡапыл "һуғып" аяҡтан йыҡмаһын өсөн, етәкселек һәр ғаиләгә адреслы социаль ярҙам вәғәҙә иткәйне.**

Дөрөҫөрәге, вәғәҙә итмәне, ә шунда уҡ рәсми ҡағыҙға яҙып, мисәт һуғып та ҡуйҙы. Йәғни уның асылы шунан ғибәрәт ине: кемдәрҙең коммуналь хеҙмәттәргә түләү күләме 12 проценттан артып китә, улар ғариза яҙып, кәрәкле документтар тапшырып, декабрҙәге түләүҙәр менән сағыштырғанда килеп сыҡҡан айырма өсөн адреслы ярҙам алырға хоҡуҡлы. Әммә был идея икенсе проблема тыуыуына сәбәпсе булды: ярай, йәштәр эшенән дә һорап китер, ял көндәрендә булһа ла сиратта тороп, кәрәкле ҡағыҙҙарын тапшырыр ҙа, ти, ә өлкән йәштәгеләр нимә эшләр? Тап ошо мәсьәлә адреслы социаль түләүҙәрҙе компенсация тип үҙгәртергә мәжбүр итте лә инде. Эйе, исем үҙгәреү менән есем үҙгәрмәй, ул шулай уҡ һәр кем өсөн тәғәйенләнгән, бары тик схема ябайлаштырыла: граждандар үҙҙәре документтар тапшырып йөрөмәй, ә идара итеү компаниялары һәм милекселәр йәмғиәттәре барлыҡ мәғлүмәтте ЕРКЦ-ларға тапшыра, ә улар, үҙ сиратында, иҫәп-хисапты автоматик рәүештә башҡарып, квитанциялар тарата.

Ошо темаға арналып, Өфө ҡала округы хакимиәтендә уҙғарылған түңәрәк ҡорҙа Берҙәм иҫәп-касса үҙәгенең генераль директоры урынбаҫары Илдар Ардаширов түләүҙәрҙең артыуы нисек билдәләнеүе һәм компенсацияның нисек иҫәпләнеүе менән таныштырҙы. "Мәҫәлән, июль өсөн коммуналь түләүҙәр суммаһы ғәмәлдәге тарифҡа ҡабатлана, - тине ул. - Әгәр фатирҙа иҫәп ҡоралдары юҡ икән - теркәлеүселәр һанына, иҫәп ҡоралдары булған осраҡта ҡулланылған күләмгә ҡабатлана. Һөҙөмтә коммуналь хеҙмәттәр өсөн декабрь айындағы тариф буйынса түләүҙәр суммаһына бүленә, әммә ҡулланған хеҙмәт күләме һәм теркәлеүселәр һаны июль айы буйынса иҫәпкә алына. Әгәр һөҙөмтәлә дөйөм түләүҙәр күләменең үҫеше 12 проценттан артып китә икән, граждан компенсация алырға хоҡуҡлы. Һәм был сумма квитанцияларға индерелеп, уларҙа күпме компенсация тейешлеге яҙыла. Әммә сумма ҡулға бирелмәй, ә коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләнергә тейешле дөйөм иҫәптән алынып, ҡулланыусы ҡалған сумманы ғына түләргә тейеш була".

Компенсация үҙе бик ябай иҫәпләнә: раҫланған тариф нормативҡа һәм теркәлеүселәр һанына ҡабатлана, килеп сыҡҡан сумманан декабрҙең 1,12-гә ҡабатланған тарифы алына. Ошо айырма компенсация суммаһын тәшкил итә лә инде.

Ләкин ысынбарлыҡта июль өсөн коммуналь хеҙмәттәргә түләү квитанцияларын алыусылар бер аҙ аптырап та ҡалғандыр. Сөнки кемдәргәләр компенсация бар, ә кемдәргәләр нуль тора. Быны ЕРКЦ хеҙмәткәрҙәре техник сәбәптәр арҡаһында килеп сыҡҡан хата, тип белдерә һәм тиҙ арала уның әҙемтәләрен бөтөрөргә вәғәҙә бирә. Әммә үрҙә яҙып үтелгән схема буйынса компенсация тейешме, юҡмы икәнлеген үҙегеҙ ҙә иҫәпләп сығара алаһығыҙ. Әгәр инде түләүҙәр 12 проценттан артмаһа, тимәк, компенсацияға өмөтләнмәгеҙ. "Барыһына ла!" тигән вәғәҙә был осраҡта 12 процентлы барьерҙы үтә алмай, һауала аҫылынып ҡаласаҡ...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ТӨРЛӨҺӘНӘН

# БЕР БИЛЕТ МЕНӘН...

**Баш ҡалала яҡын киләсәктә һигеҙ урында бер транспорттан икенсеһенә күсеп ултырыу үҙәге төҙөләсәк. Улар бер ҡыйыҡ аҫтында ял итеү, туҡланыу мөмкинлеге булған заманса комплекс буласаҡ. Иң мөһиме - берҙәм билет буйынса транспорттың төрлө төрөнә ултырып китеү мөмкинлеге тәҡдим ителәсәк. Шулай уҡ был үҙәктәргә ҡала-ара маршруттар ҙа тоташасаҡ.**

Бөгөн Рәсәй тимер юлдарының Куйбышев дирекцияһы тарафынан "Дим" һәм "Спорт" тимер юл станцияларында реконструкция бара. Ул халыҡтың хәрәкәт итеү мөмкинлеге сикләнгән категорияһының ихтыяжын да иҫәпкә ала. Бынан тыш, төҙөлөш эштәре тамамланыу менән станцияларҙың эргәһендәге территориялар төҙөкләндерелеп, тәртипкә килтерeләсәк. Артабан бындай "яҙмыш" "Ағиҙелдең уң яҡ яры", "Өфө", "1629-сы километр", "Парк", "Черниковка", "Шаҡша" станцияларына ла ҡағыласаҡ.

# ӘСӘЛЕК КАПИТАЛЫ ЯРҘАМЫ

**Башҡортостанда Әсәлек капиталына барлығы 160 меңдән ашыу сертификат, уларҙың 14 меңе быйыл йыл башынан алып тапшырылған. Төбәктең Пенсия фондынан хәбәр итеүҙәренсә, әсәлек капиталы республикала йәшәгән 91 000 ғаиләгә торлаҡ шарттарын яҡшыртырға ярҙам иткән. 53 мең ғаилә әсәлек капиталы аҡсаһы менән тулыһынса файҙаланған.**

Сертификат аҡсаһы йышыраҡ торлаҡ кредиттарын һәм займдарҙы ҡаплауға тотонола: 64 меңдән ашыу ғаилә сертификат ярҙамында өлөшләтә йәки тулыһынса торлаҡ кредиттарын ҡаплаған. Пенсия фондының район һәм ҡалаларҙа урынлашҡан идаралыҡтары был маҡсаттарға 20,5 миллиард һум аҡса йүнәлткән.

- Рәсәй Пенсия фонды идаралығында кредит алмайынса торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға 27 725 ғариза ҡабул ителде, һәм был маҡсаттарға 7,4 миллиард һум аҡса йүнәлтелде, - тип һөйләне Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан Республикаһы буйынса идарасыһы Фоат Хантимеров. - Балаларға белем биреүгә 1 764 ғариза ҡабул ителде, улар буйынса 62,5 миллион һум аҡса күсерелде.

# ПЕНСИОНЕР... БАЙЫЙ

**Эшләп йөрөүсе пенсионерҙар 1 августан пенсияны арттырылған күләмдә ала башлаясаҡ. Уларҙың хеҙмәт пенсияларына өҫтәмә эш биреүсенең Пенсия фондына күсергән страховка иғәнәһенә ярашлы тормошҡа ашырыла.**

РФ Пенсия фондының Башҡортостан Республикаһы буйынса идарасыһы Фоат Хантимеров әйтеүенсә, пенсияға өҫтәмә пенсионерҙарҙың ғаризаһынан тыш, автоматик рәүештә индерелә, берәүгә лә район һәм ҡалаларҙағы пенсия идаралыҡтарына барып йөрөү кәрәкмәй. Һәр пенсионерҙың пенсия күләменә өҫтәмә страховка иғәнәһенең күләменә бәйле, индивидуаль иҫәпләнә.

Белеүегеҙсә, быға тиклем Рәсәй пенсионерҙарының хеҙмәт пенсиялары быйыл февралдә - 6,6 процентҡа, апрелдә 3,3 процентҡа арттырылғайны.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔Өфөлә "Рәсәй һәм Ҡаҙағстан: сәйәси-хоҡуҡи, иҡтисади һәм социаль-мәҙәни хеҙмәттәшлек нигеҙҙәре" халыҡ-ара форумы үтте. Уны Башҡортостан социаль технологиялар институты нигеҙендә Рәсәй Федерацияһы ЮНЕСКО-ЮНЕВОК үҙәге ойошторҙо. Биләмәләрҙе сәйәси-хоҡуҡи йәһәттән үҫтереү мәсьәләләре, халыҡ-ара сәйәсәт өлкәһендәге хеҙмәттәшлектең үҫеш тенденциялары тикшерелгән сарала Ҡаҙағстан делегацияһы, БР "Елим Ай" ҡаҙаҡ милли мәҙәниәте үҙәге" төбәк йәмәғәт ойошмаһы ағзалары, Башҡортостандың ғилми һәм йәмәғәт берләшмәләре вәкилдәре ҡатнашты.

✔Халыҡ мәшғүллеге хеҙмәтендә бөгөнгө көндә ете меңгә яҡын өфөлө иҫәптә тора, уларҙың 6,5 меңе - эшһеҙ. 5,5 меңдән ашыу эшһеҙ пособие ала. Баш ҡаланың вакансиялар банкында 16 мең эш урыны иҫәпләнә. 2013 йыл башынан Өфөнөң халыҡ мәшғүллеге хеҙмәтендә йәмғеһе 95 меңгә яҡын вакансия тураһында мәғлүмәт ҡабул ителгән. Был ваҡыт эсендә 14 мең өфөлө эш эҙләүселәр сифатында иҫәпкә ҡуйылған, 7,7 мең кеше эшһеҙ тип танылған. Йыл башынан алып 8,6 меңдән ашыу эшһеҙ иҫәптән төшкән, 10,7 мең кеше эшкә урынлаштырылған.

✔Билдәле башҡорт спортсыһы, "донъяның иң көслө кешеһе" Эльбрус Ниғмәтуллин ете трамвайҙан торған составты ете метр алыҫлыҡҡа һөйрәп, яңы донъя рекорды ҡуйҙы. Рекорд ҡуйыу буйынса бындай үҙенсәлекле сара Силәбе ҡалаһының трамвай юлдарында ойошторолдо. Эльбрус Ниғмәтуллиндың ауырлығы - 136 килограмм, ә алты трамвайҙың дөйөм ауырлығы 108 тоннанан ашыу тарта. Урал атлеты йыл аҙағынаса йәнә бер рекорд ҡуйырға ниәтләй: Башҡортостандағы дуҫтарының тәҡдиме буйынса Эльбрус Ниғмәтуллин Өфөлә электр поезын һөйрәмәксе.

✔Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылына арнап, Өфө ҡала округы хакимиәтенең Йәштәр сәйәсәте буйынса комитеты социаль видеороликтар һәм фотографиялар конкурсы уҙғара. Унда 18-30 йәштәге кешеләр ҡатнаша ала. Ғаризалар һәм эштәр 1 сентябргә тиклем Октябрь проспекты, 118-се йорт адресы буйынса 25-се кабинетҡа ҡабул ителә йә **cszm@mail.ru.** электрон адресына ебәрергә мөмкин. Белешмәләр өсөн телефондар: 279-06-35, 279-06-56.

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

**Учалы районында ҡымыҙ етештереүселәрҙең VIII республика семинар- конкурсы булып үтте. Сара БР Ауыл хужалығы министрлығы, хужалыҡтар вәкилдәре, белгестәре ҡатнашлығындағы кәңәшмәнән башланды. Унда йылҡысылыҡтың үҫеш юлдары, маҡсатлы программаларҙа ҡатнашыу һәм башҡа төрлө мәсьәләләр ҡаралды.**

# ҠЫМЫҪ БЕШЕҮ...

## майҙандарҙа күрһәтер оҫталыҡ ул

Артабан семинарҙа ҡатнашыусылар "Юлдаш" йәмғиәтенә юл алды. Атаҡлы йылҡысы Ғәли Сибәғәтуллин етәкләгән был хужалыҡ тоҡомло башҡорт аттары үрсетеү, ҡымыҙ етештереү, ҡортсолоҡ менән уңышлы шөғөлләнә. Бынан тыш, илле кеше эшләгән "Юлдаш"та һыйыр ҙа һауалар. Ҡунаҡтар ҡымыҙ фермаһында бейә һауыу шарттары, ҡымыҙ бешеү процесы менән танышты, тоҡомло айғырҙар һәм бейәләр күргәҙмәһен ҡараны. Һәм, әлбиттә, ҡунаҡтар былтырғы конкурс еңеүсеһе Лилиә Лоҡманова бешкән ҡымыҙҙан ауыҙ ҙа иттеләр. Конкурс үтә торған яланға, Ҡалҡан буйына, йүнәлгәндә ҡунаҡтарҙың кәйефе шифалы эсемлектән бермә-бер күтәрелгәйне. Кемдәндер ауыҙынан уйынлы-ысынлы шаяртыу ҙа яңғыраны: "Был конкурста беренсе урын алыуға ынтылмаҫҡа кәрәк, еңгән осраҡта һинең районың ҡунаҡтарҙы ҡабул итергә тейеш, ә был бик яуаплы, сығымлы. Быны икенсе-өсөнсө урындар - иң шәп! Сөнки ҡымыҙың да юғары баһалана, киләһе конкурс өсөн дә яуаплылыҡ юҡ".

Ысынлап та, былтырғы бәйгелә учалылар еңеүсе булғайны һәм ҡағиҙә буйынса, сираттағы конкурс та еңеүсе районда үткәрелә. "Былтыр республика ҡымыҙсылары конкурсында еңеп, "Өфө" йылҡысылыҡ заводының тоҡом айғыры менән бүләкләнгән "Юлдаш" йәмғиәте - йылҡысылыҡ буйынса райондың иң ҙур хужалығы: унда 741 баш йылҡы, шул иҫәптән 254 бейә аҫрала, - тип һөйләне Учалы районы хакимиәте башлығы урынбаҫары, ауыл хужалығы бүлеге начальнигы Әдип Әғләм улы Ҡарамышев был хаҡта. - "Юлдаш" Учалы тибындағы башҡорт аттарын үрсетеү буйынса "тоҡомсолоҡ заводы" статусына ла эйә. Бында боронғо шөғөлөбөҙгә юғалырға ирек бирмәй, киреһенсә, заман шарттарына яраҡлашырға, артабан үҫешергә булышлыҡ итеү буйынса арыу ғына тәжрибә лә тупланды. Көтөүселәр күҙәтеүе аҫтында бейәләрҙе өйөргә туплап, айғыр ҡарамағында йөрөтөү алымын уңышлы ҡулланалар. "Юлдаш" ҡышын да ҡымыҙ етештерергә ниәтләй. Бына ошондай һәр яҡлап өлгөлө хужалыҡ менән яҡындан танышыу бер кемгә лә зыян булмаҫ, тим..."

Ҡунаҡтарҙы бәйге майҙаны Ҡалҡанда "Хазина" фольклор төркөмө йырлап-бейеп ҡаршыланы, "Оҙонгүл" бейеү ансамбле, Илдар Усманов һәм башҡа артистар ҡатнашлығындағы концерт, ат сабышы байрам кәйефен тағы ла күтәреп ебәрҙе. Учалы районы хакимиәте башлығы Фәрит Дәүләтгәрәев, БР Ауыл хужалығы министры урынбаҫары Азат Йыһаншин, "Роcплемконзавод" ассоциацияһы генераль директоры Александр Тимченко һәм башҡалар ҡымыҙ бешеүселәрҙе байыу тәбрикләне, ҡымыҙ етештереүҙе үҫтереүгә йүнәлтелгән конкурстың әһәмиәтен юғары баһаланы һәм барыһына ла уңыштар теләне.

Конкурс булғас, унда еңеүселәре лә, еңелеүселәре лә була инде. Тәүгеләрен Ҡүгәрсен районының "Тәүәкән" предприятиеһы етәкләне. Уларға алтын миҙал һәм айғыр бүләк ителде. Учалы районының "Юлдаш" хужалығы - икенсе, Әлшәй районының "Ғәниев" хужалығы өсөнсө урын алды.

Ҡымыҙ бешеү оҫталығы һәр кем яулай ала торған үр түгел шул. Электәнән ундайҙар күҙ өҫтөндәге ҡаш һымаҡ булған. Шуға ла ҡымыҙ бешеү оҫталарын ошолай майҙандарға ярышҡа сығарыу уларҙың тәжрибәһен башҡаларға, йәш быуынға тапшырыуҙа оло әһәмиәтҡә эйә.

**Нурия ШӘЙХИСЛАМОВА.**

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# ҠЫҘЫЛ ЭРЕМСЕК...

## егәрлеләр шөғөлө

**Тырышып донъя көткән, кәртә-ҡура тулы мал-тыуар тотҡан, ишле балаларына ярҙам итергә ынтылған оло быуын кешеләре һәр кемдә һоҡланыу уята.**

Баймаҡ районының Байым ауылында кәрҙәштәренең ихтирамхөрмәтенә лайыҡ йәшәгән Ғәлиә апай һәм Фәрит ағай Тайбугиндарҙың эшһөйәрлегенә хайран ҡалырһың. Хәҙер улар өсөн иң ҡыҙыу мәл. Сөнки Тайбугиндар бесән әҙерләү, шул уҡ ваҡытта еләкемеш йыйыу менән дә мәшғүл.

Аш-һыуға маһирлығы менән хайран ҡалдырған Ғәлиә Ғөбәйт ҡыҙы яратып ашаған ризығыбыҙ - ҡыҙыл эремсекте лә бик оҫта һәм тәмле итеп әҙерләй. Бала саҡта әсәһенен, өләсәһенең был татлы һәм файҙалы ризыҡты нисек әҙерләүен күреп үҫкән Ғәлиә апай ҙа табынды унан башҡа күҙ алдына ла килтерә алмай. Әлбиттә, ҡыҙыл эремсек әҙерләү бик мәшәҡәтле эш. Ғәлиә Ғөбәйт ҡыҙы әйтеүенсә, бер ҡаҙан тәмлекәс ҡайнатып алыу өсөн иртәнән кискә тиклем ваҡыт китә. Тимәк, ул ялҡауҙар шөғөлө түгел. Сәғәттәр буйы ҡаҙандағы аҡты болғата-болғата баҫып торсо әле! Ғәлиә апайҙың был тәмлекәсен Байымда ғына түгел, ә Баймаҡ ҡалаһында йәшәгән кешеләр ҙә ҙур теләк менән, алдан заказ биреп һатып ала.

Әлбиттә, үҙ аллы донъя көткән, һәр береһе хеҙмәт өлкәһендә ҙур уңыштарға өлгәшкән дүрт улы һәм бер ҡыҙы ата-әсәһенә ярҙам күрһәтергә ынтылып тора. Шулай ҙа Ғәлиә апай: "Хәл-һаулыҡ булғанда, ҡулдар эш һорап янғанда, үҙебеҙ эшләйбеҙ әле", - тип йылмая. Ул быйыл иш янына ҡуш тип, урмандарҙа ҡып-ҡыҙыл булып түшәлеп ятҡан еләк йыйып та һатҡылаған. "Аҡса аяҡ аҫтында ятҡанда, нинә уны тапап үтеп китергә? Юҡһа, аҡса юҡ, ти ҙә ултыра ҡайһы берәүҙәр..." тип бик дөрөҫ әйтә Ғәлиә апай.

**Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.**

ҺОРАУ - ЯУАП

# АТАЙ БУЛА БЕЛМӘҺӘ...

**Ирем менән айырылышҡанға 15 йыл, ул саҡ ҡыҙыбыҙға 2 йәш ине. Атаһы тәүҙәрәк һирәкләп кенә аҡса ебәргәләне лә аҙаҡ бөтөнләй онотто, юҡҡа сыҡты. Ҡыҙымдың 17-һе тулды, ә атаһы уны бер тапҡыр ҙа күргәне юҡ. Был "атай"ҙың ҡартайған көнөндә килеп сығып, балама ауырлығы төшмәһен, тип борсолам. Уны нисек итеп атайлыҡ хоҡуғынан мәхрүм итергә була?**

- РФ Ғаилә кодексы тарафынан билдәләнгән нигеҙләмә булған хәлдә, ата-әсәнең кемеһенә булһа ла хоҡуҡтарынан мәхрүм итеү тураһында юллама бирергә була һәм фәҡәт түбәндәге осраҡтарҙа:

- ата-әсәнең берәүһе айырылышҡандан һуң үҙ бурыстарын үтәүҙән тайпылһа һәм бала тәрбиәләүҙә ҡатнашмаһа ( баланың эштәре, уҡыуы, һаулығы менән ҡыҙыҡһынмаһа, уның менән даими осрашып тормаһа).

- ата-әсә хоҡуғын физик йәки психик рәүештә яуыз ниәттәрҙә файҙаланһа һәм был баланың нормаль үҫешенә, уҡыуына ҡаршылыҡ тыуҙырһа, баланы хоҡуҡҡа ҡаршы ғәмәлдәр ҡылыуға этәрһә.

- баланың ата-әсәһе наркоманлыҡ йәки эскелек менән шөғөлләнһә, улар балаларына ҡарата хоҡуҡтарын юғалта ( уларҙың зарарлы ғәҙәттәргә бәйлелеге документтар нигеҙендә раҫланырға тейеш).

- әгәр ата-әсәнең береһе икенсеһенең йә балаларҙың һаулығы һәм ғүмеренә ҡарата енәйәт ҡылһа , ул шулай уҡ ата-әсә хоҡуғынан мәхрүм ителә.

Ата-әсә хоҡуғынан мәхрүм итеү суд ҡарары буйынса ғәмәлгә ашырыла. Суд ултырышына ата-әсә икеһе лә, прокурор һәм опека органдары вәкиле саҡырыла. Суд алдында яуап тотоусының ултырышҡа килмәүе уны ата-әсә хоҡуғынан мәхрүм итеүгә ҡаршылыҡ булып тора алмай.

# ҒӘМӘЛЕНӘ КҮРӘ - ӘМӘЛЕ

**Ҡатыным менән айырылышырға йыйынабыҙ. Кәйефенә ҡарағанда, ул артабан минең улым менән аралашыуыма ҡаршы булмаҡсы. Был мәсьәләне закон нигеҙендә хәл итеп буламы?**

- Ата-әсәнең баланан айырым йәшәйәсәк береһенең ата-әсә хоҡуғын атҡарыу тәртибе тураһында яҙма ( нотариустан раҫлатыу кәрәкмәй) килешеү төҙөргә мөмкин. Унда айырым йәшәйәсәк ата йә әсәнең, ә был осраҡта - һеҙҙең, бала менән күрешеү, аралашыу ваҡыты һәм көндәре билдәләнә. Ҡатыныгыҙ бындай килешеүгә бармаһа, бәхәс опека һәм попечителлек органдары ҡатнашлығында суд тарафынан хәл ителә. Әгәр суд ҡарарын үтәүҙән дә тайпылған хәлдә, ҡатыныгыҙға ҡарата граждандыҡ процессуаль закон нигеҙҙәрендә ҡаралған саралар күрелә, йәғни суд ҡарарын үтәмәгән өсөн уның штраф түләтеү кеүек яуаплылыҡҡа тарттырылыуы ихтимал. Ә инде был саралар ҙа йөғонто яһамаһа, ҡатырaҡ санкциялар ҡулланыла: һеҙ, баланың фекерен иҫәпкә алып, судтан уны үҙегеҙҙең ҡарамаҡҡа биреү тураһында ҡарар сығарыуҙы талап итә алаһығыҙ.

Айырым йәшәүсе ата йә әсә уҡытыу-тәрбиә, дауалау һәм халыҡты социаль яҡлау учреждениеларынан балаһы хаҡында мәғлүмәт алырға хоҡуҡлы. Уның тарафынан баланың ғүмере һәм һаулығына хәүеф янаған осраҡта бындай мәғлүмәт биреү тыйыла. Мәғлүмәт биреүҙән баш тартыу осрағына дәғүә суд тәртибендә ҡарала.

**Фәүзиә ИШБИРҘИНА**
**әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

## Поликистоз



Поликистоз - ул үҫеш аномалияһы, паренхиматоз ағзаларҙа йәки тышсалы, эсе шыйыҡлыҡ менән тулған күп кисталар булыуы. Бындай осраҡта һарымһаҡ төнәтмәһе ярҙамға килә. 1 кг һарымһаҡты ит турағыс аша үткәрергә һәм ҡараңғы быялалы һауытта 1 литр ҡайнатып, һыуытылған һыу ҡушып, 1 ай төнәтергә. Ваҡыты-ваҡыты менән болғатырға. Килеп сыҡҡан төнәтмәне өс ҡат марля аша һөҙөргә, ҡараңғы һалҡын урында (тик һыуытҡыста түгел!) һаҡларға. Көнөнә 3 тапҡыр, ашар алдынан ярты сәғәт алда 2-шәр ҡалаҡлап ярты стакан йылы һөткә ҡушып эсергә. Дауаны һәр өс көн һайын ҡабатларға, һуңынан УЗИ эшләргә. Һарымһаҡ төнәтмәһе бик шифалы, ул йөрәк клапандарын нығыта, йәшәртә, поликистозды яҡшы дауалай. Поликистоз ваҡытында өҫтәмә рәүештә дегәнәк япраҡтары төнәтмәһе эсергә була. Ай дауамында сәй итеп эсергә.

Игтибар! Һейҙек ҡыуыу маҡсатында бер үк үләнде ҡулланыу кәңәш ителмәй, сөнки бер аҙнанан организм был үләнгә өйрәнә һәм файҙаһы булмай. Шуға ла һәр ун көн һайын уларҙы алыштырып торoу фарыз. Түбәндә уларҙың исемлеген килтерәм. Әгәр ҙә 50 мл ҡайнар һыуға 50 мл һөт өҫтәһәң, бынамын тигән һейҙек ҡыуыусы сара килеп сыға. Кишер, сөгөлдөр, ҡыяр, сельдерей, томат, алма, лимон, виноград һутын күберәк эсегеҙ. Яңы ғына һығып алынған ҡабаҡ һуты ла һейҙек һыуыу сифатына эйә. Һырғанаҡ, мүк еләге пиелонефрит ваҡытында алыштырғыһыҙ. Ҡыҙыл миләш төнәтмәһе файҙалы: 3 өлөш миләшкә 1 өлөш ҡыҙыл көртмәле япрағын ҡушып болғатырға. 1 ҡалаҡ ошо ҡатнашмаға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, плитәлә 3-4 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашар алдынан ярты сәғәт алда ярташар стакан эсергә. 1 балғалаҡ бал өҫтәргә мөмкин.

## Һарымһаҡ

Һарымһаҡ иммунитетты нығыта, ашҡаҙан, йөрәк, ҡалҡан биҙе эшмәкәрлеген яҡшырта, ҡан тамырҙарын таҙарта, шеш барлыҡҡа килеүен иҫкәртә, организмды йәшәртә. Бик шифалы төнәтмәне түбәндәгесә әҙерләйәҙр: 1 кг һарымһаҡты таҙартып, ваҡларға. Өс литрлы банкаға бер литр һыу һәм ошо һарымһаҡты һалып, ҡапҡас менән ябып, 2 аҙнанан 1 айға тиклем төнәтергә. 1 балғалаҡ ошо төнәтмәне ҡайнаған бер стакан һөт менән ҡатыштырып, иртәнге аштан 15-20 минут алда эсергә.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ...
## дауалау һәм ҡурсалау магияһы

### Зәңге (теш ҡаҙнаһын) имләү

**Дәңгелә ҡасырыу.** Беренсе үҫеп сыҡҡан ашарға яраҡлы үләндәрҙе өҙөп ҡабаһың да: "Дәңгелә, ҡас, дәңгелә, ҡас, иҫке ҡорһаҡ, яңы аш!" - тиһең һәм иһаһайлап 'кешнәп" ҡуяһың. Был йола "дәңгелә ҡасырыу" тип атала. Уның маҡсаты: эйәргә мөмкин булған барлыҡ сирауырыуҙарҙы ҡыуыу, ҡурҡытыу, ҡасырыу.

Дәңгелә - цинга.

**Өс йомортҡа ашау.** Кәкүк ҡысҡырған ваҡытта өс яңы йомортҡа ашай алһаң, зәңге ауырыуы бөтә, имеш.

**Яңаҡ шешен имләү.** Теш һыҙлап, яңаҡ шешһә, шеште еңел генә һыйпап, былай тигәндәр:

*Ҡорт тамырын быуам,*
*Таш аҫтына тығам,*
*Име-томо шул булһын!*
*Тфү, тфү, тфү!*

### Ҡолаҡ ауырыуҙарын имләү

**Ҡолаҡбауға им.** Ҡолаҡбау - ҡолаҡ артына сыҡҡан шеш ул. Ул ел ауырыуы. Шуға унан ҡотолоу өсөн ағасҡа ҡара таҫма бәйләгәндәр. Ел эйәһе был таҫманы үҙенең ҡойроғо тип, ағас ботаҡтарына уралып, төрөлөп ҡала икән ауырыған кешенән.

**Ҡолаҡбауға им-том.** Ҡолаҡбау булһа, уны ла ел ауырыуы тигәндәр. Әүәле уға ҡыҙыл ҡарағаттың, ҡыҙыл көртмәлене, баланды, ныҡ әсегән ҡымыҙға, имсәк һөтөнә ҡушып эсергәндәр. Шулай уҡ шеш еренә йылҡы майын тамсылап тамыҙып торғандар. Тамыҙғанда ошо әпсенде әйткәндәр:

*Бында булдың! Йоҡоға талдың!*
*Инде ҡал, бирермен бер баш мал.*

**Инсе һорау.** Ҡолаҡтың арты боҙолһа, балаға арт йорттан (инә йортонан) - бер ҡашыҡ, алды боҙолһа, алғы йорттан (ата йортонан) бер ҡашыҡ бирелә. Алды боҙолһа, баланың әсәһе, арты боҙолһа, атаһының һеңлеләре, апайҙары: "Берҡалаҡ!" - тип ҡысҡыра.

**Инсе мал.** Баланың ҡолағы боҙолоусан. Йә ал яҡтан, йә һырт яғынан бысҡылдап тора. Шулайтһа, инсе теләй, тиҙәр. Ҡолаҡтың һыртынан инсе теләһә, инә йортонан инселәнгән мал теләй була. Алдан боҙолһа, ата йортонан мал һорай була. Шунан мал инселәнгәс, шул малдың ҡанын сығарып, ауыртҡан ҡолаҡҡа һөртһәң, йүнәлә лә ҡуя, ти.

Вәғәҙә ителгән малды биреү нәҙерен үтәмәү был ауырыуҙың сәбәбе булып тора, тип иҫәпләгәндәр. Был осраҡта ҡолаҡ япрағының һырты ышҡыла, йәғни ауырыу вәғәҙә ителгән малдың ҡанын һорай (инсе һорай йәки инсе мал һорай). Вәғәҙә ителгән мал (йәки ҡош) булмаһа, теләһә ҡайһы һарыҡтың уң ҡолағын йәки теләһә ҡайһы тауыҡтың уң аяғын киртеп алалар ҙа баланың ауыртҡан еренә шуның ҡанын һөртәләр. Был ваҡытта: "Бына һиңә инсе, инсе бирәм", - тип әйтәләр.

**Исемде мейескә ҡысҡырыу.** Ҡолағы боҙолған баланың исемен әйтәһең дә мейескә ҡысҡыраһың:

*Фәлән улы Фәләндең*
*Ҡолаҡ арты боҙолған,*
*Ҡолағына бер ҡолаҡ,*
*(Уға бер ҡолаҡ).*

**Тишелгән ҡолаҡ боҙолоуҙан им.** Ҡолаҡты ҡоштар килгәндә, ҡош-ҡорт сала башлағанда тишмәйҙәр. Ҡош киткәндә лә тишергә ярамай. Юғиһә, ҡолаҡ боҙола. Ҡолаҡ боҙолһа, көмөш тағып, май һөртөп, доға уҡып имләгәндәр.

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**

**(Дауамы бар).**

ТӘБИҒӘТ ҺЫНАУЫ

**Билдәле булыуынса, 8 апрель кисендә Инйәр йылғаһында барлыҡҡа килгән боҙ тығыны арҡаһында һыу ташып, Белорет районы Ғәбдүк ауылының 45 йортона ҙур зыян килде. Ташҡын ваҡытында 35 баш - эре, тиҫтәләгән ваҡ мал, ҡош-ҡорт һәләк булған. Йөйәк ауыл хакимиәтенән белдереүҙәренсә, зыян күреүселәргә республика халҡынан матди ярҙам килеүен дауам итә. Республика халҡы - 300 мең, "Урал" мәрхәмәтлек фонды 2 миллион һум аҡса тапшырып, бәләгә тарыусы ғаиләләргә ярҙам күрһәткән. Бынан тыш, бәләкәй йөк автомобилдәре менән кейем-һалым, башҡа кәрәк-яраҡтар ебәреүсе ойошмалар ҙа булған. Шулар иҫәбендә Башҡортостан Республикаһының Адвокаттар палатаһы ла бар. Әйтеүҙәренсә, мәрхәмәтлек акцияһында меңгә яҡын адвокат ҡатнашҡан. Шулай итеп, ошо көндәрҙә адвокаттар коллегияһы вәкилдәре Ғәбдүктә булып, йыйылған 200 мең һум аҡсаға һатып алынған өр-яңы көнкүреш техникаһын, балалар өсөн уҡыу кәрәк-яраҡтарын ауыл халҡына таратты. Уларҙың был сәфәрен беҙҙең хәбәрсебеҙ ҙә уртаҡлашты һәм бәләгә тарыған ауыл халҡынан бөгөнгө һөйөнөстәре һәм әле лә хәл ителмәгән проблемалары тураһында һорашты. Һүҙ - ғәбдүктәргә:**

# ҒӘБДҮКТӘРҘЕҢ БЕРҘӘМЛЕГЕН...
## башҡаларға ла йоҡторорға ине



**Фәүзиә ЙОСОПОВА, күп балалы әсә, пенсионер, 2-се төркөм инвалиды:**

- Йортобоҙға икенсе тапҡыр ябырыла инде тәбиғәт ғәрәсәте: 1996 йылда янғын сығып, өс өйҙә юҡҡа сығарғайны. Унан һуң "Йәштәр" урамына күстек - әлеге лә баяғы, янған урындан тиҙерәк китергә кәрәк, тигән һүҙ йөрөй бит халыҡта. Ҡайһы бында ла артыбыҙҙан эйәреп килгән икән. Һуңғы дүрт йыл эсендә генә ике баламды ерләргә тура килде. Быйылғы ташҡын алдынан, әмәлгә ҡалғандай, ирем, күҙенә операция яһатып, район үҙәгенә дауаханаға яткайны. Өйҙә бер үҙем ултырмаҫ өсөн иптәшкә күрше ҡатынды саҡырғайным, ярай ул килде әле, рәхмәт яуғыры. Иң ауыр минутта ярҙам итеп йөрөгән Дамир Ғәлләмовҡа ла бөтмәҫ рәхмәттәремде еткергем килә. Бер үҙемә бигерәк ауыр булыр ине, юғиһә.

Һыу, ҡапыл күтәрелеп, күкрәк кимәленә етте, өйгә лә бәреп инде. Ете баш һыйыр малыбыҙ, тайыбыҙ, һарыҡтарыбыҙ, ҡош-ҡортобоҙ ҡорбан булды, ҡоймабыҙ емерелде, бураbыҙҙың яртыһы ағып китте. Өйөбөҙгә лә ныҡ зыян килде. Һыу ташыуы тағы берәй сәғәт дауам итһә, ғәрәсәт йортобоҙҙо ла емереп ташлар ине, моғайын. Аҙаҡ баҙҙы асып ҡарағас, иҫ китте: имән бағаналар ҡыйшайышып бөткәйне. Һыу өйҙәге телевизорҙы, һыуытҡысты эштән сығарҙы, шифоньерҙарҙы, стенкаларҙы ҡуҙғалтырмын тимә - ыуалып тора. Боҙло һыу кисеп йөрөп, ҡаты ғына һалҡын үткәргәйнем, оҙаҡ ваҡыт дауаланып ятырға тура килде. Әле лә, тулыһынса һауыҡтым, тип әйтә алмайым. Ошондай ауыр ваҡытта беҙҙе онотмағандары өсөн республика халҡына - беҙгә төрлө кәрәк-яраҡ, мал-тыуар менән ярҙам итеүсе миһырбанлы кешеләргә рәхмәтем ҙур, Хоҙай имендек бирһен үҙҙәренә. Өфөнән Хәмзә хәҙрәт Ғәлләмовтың бер һыйырлыҡ аҡса биреүе үҙе генә ни тора! Рәхмәт райондашыбыҙға! Бөгөн Өфөнән килгән мәрхәмәтле кешеләрҙең - адвокаттарҙың һыуытҡыс бүләк итеүҙәренә лә һөйөнөп бөтә алмайым. Игелекле кешеләр бар шул донъяла...

**Сания РӘХМӘТОВА, күп балалы әсә, пенсионер:**

-Әле күкрәп, йәм-йәшел үләндәр үҫеп ултырған өй алдыбыҙға ҡараһаң, яңыраҡ ҡына ошонда ҡалынлығы яҫтыҡтай, майҙаны сәхнәләй боҙҙар йөҙөп йөрөүен күҙ алдына ла килтереүе ҡыйын. Ул көндө мин өйҙә Айтуған һәм Айһылыу исемле ейәндәрем менән генә инем. Улым вахталы эштә, атаһы мәрхүм булғандан һуң, патронатлыҡҡа алынған ейәнем дә Өфөлә уҡыуҙа ине. Һыу килә башлағас, итек кейеп, балаларға йылы кейем кейҙергәс, өйҙә ҡайһы бер әйберҙәрҙе өҫкәрәк күсереп һала башланыҡ. Бәләкәстәр ҙә йүгерешеп, һыныпып, тегене-быны йыйышҡан була. Тиҙҙән һыу өйгә килеп инде. Балаларҙы ныҡ итеп кейендергәс, диванды тирәсенә мендереп ултырттым да, тәҙрәнән тышты күҙәтә башланым. Ҡапҡаны шар асып ихатаға килеп ингән боҙҙар, үҙҙәрен хужаларса тотоп, һарай яғына уктады. Һыйырыбыҙ, башы эшләп, һыштан ашалып бөтмәгән эскерт, йәғни өйөлгән бесән өҫтөнә менеп баҫты, ә танаҡайыбыҙ түбәлек башына ҡасты. Бейәбеҙ генә, ҡайҙа барырға белмәйенсә, муйынына еткән һыуҙа тегеләй барҙы, былай килде... Нисек үлмәй ҡалғандыр... Уның ҡарауы, быҙауыбыҙ һәм уң дүрт баш һарыбыбыҙ батып үлде.

Был ташҡын ауыл халҡының сыҙамлығын, ныҡлығын аҙ һынаманы инде былай. Әле лә ҡыйынлыҡтар юҡ түгел - һыуытҡысыбыҙ боҙолғас, йәйге эҫелә аҙыҡ-түлек һаҡлауы ҡыйын, шулай ҙа күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәскә тырышабыҙ - илар ерҙә лә йылмаябыҙ. Дөйөм алғанда, республикабыҙ халҡының, ауылдаштарҙың битараф булмауы минең дә күңелде йылыта. Беҙҙең ғаиләгә лә ярҙам итеп, 12 мең һум аҡса бүленде. Бөгөн микротулҡынлы мейес тә бирҙеләр, рәхмәт өфөләргә. Хөкүмәтебеҙ ҙә пенсияһынан айырмай -күҙ терәп торған бер нәмә шул инде. Шулай ҙа, ярҙам етерлек булды, тип әйтергә иртәрәктер. Яңғыҙ ҡатындарға, буралары ағып киткән йәштәргә ярҙамды күберәк күрһәтһендәр ине.

**Нурил ЙОСОПОВ, шәхси эшҡыуар:**

- Минең ҡоймама, магазиныма, өй йыһаздарына зыян килде. Һыуыткыстар эшләмәй. Мал-тыуарҙарҙы тиҙ генә өйҙән соланына ҡыуып индерергә өлгөрҙөк. Бейектәрәк ултырғас, өйгә һыу бик инмәне. Ғаиләмде өйҙән сығарҙым да, ауыл халҡына ярҙамға йүгерҙем. Әлиә Ғәлимова апайҙарға, уларҙың күршеләре Илдус ҡәйнештәргә киттем. Балалары менән өй башында ултыралар ине, уларҙы сығарыштым. Хәл нормалләшкәс, электр линияларын ремонтланыҡ. Эш күп булды, бер-нисә төн йоҡламаныҡ.

Беҙҙең ауыл халҡы, электән бәләкүрәм - бик берҙәмдәр. Йәштәр - айырыуса. Бының сәбәбе, моғайын, йүнле юл булмауҙалыр. Ауылда ут сыҡһа, беҙ ул утты үҙебеҙ һүндерәбеҙ - ут һүндереүселәр һунлап ҡына килә. Ашығыс медицина ярҙамы ла ауылға тиклем килеп етмәй, ауырыуҙы асфальт юлға тиклем үҙебеҙгә алып сығырға тура килә. Минә бер сирләп киткән баланы Йөйәк аша үтеп, трассаға тиклем сығарып ҡуйырға тура килде яңыраҡ. Шуға ла көслө, берҙәм беҙҙең халыҡ - бер кемдән ярҙам көтөп тормай. Халыҡ берҙәм булмаһа, 1996 йылдағы янғында бөтөн ауыл янып юҡҡа сығыр ине. Бесән ваҡыты - ҡыҙыу мәл ине бит.

Ярҙамға килгәндә, ауыл советы биш йөҙ һум аҡса бирҙе, райондың халыҡҡа социаль ярҙам күрһәтеү идаралығынан ике мең һум күсерҙеләр, тағы ҡайҙандыр ике мең һум аҡса күскән - улары өсөн рәхмәт. Бөгөн адвокаттар палатаһынан һыуытҡыс бирҙеләр, рәхмәт уларға.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Ғәбдүк ауылында ирмәк халыҡ йәшәй ул", тигәйне Белорет ҡалаһынан бер егет. Ирмәк, тигәндә, ана шул берҙәмлек, ярҙамсыллыҡ та күҙҙә тотолғандыр, моғайын. Ысынлап та, беҙгә, индивидуаллек хөкөм һөргән ҙур ауылҡалаларҙа йәшәгәндәргә, тәбиғәт менән бер ритмда йәшәгән урман-тау халҡына ҡарап, шулай һоҡланырға ғына ҡала инде. Әгәр яҡын киләсәктә халҡыбыҙҙы яңы рухи кимәлгә күтәрер лидер барлыҡҡа килер булһа, ундай шәхес кешелек сифаттары иң саф килеш һаҡланып ҡалған Ғәбдүктән, йә башҡа шундай матур ауылдан сығыр, моғайын.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

*✓ Доктор Мейер тигән кеше: "Шуны өçтәргә кәрәк, Дон далаларында беҙгә башҡорттар ҡәбиләһенә ҡараған ҡурҡыу белмәç кешеләр менән һуғышырға тура килде", - тип яҙып ҡалдырған.*



ТАРИХЫНДАН ДАН ТАП!

# АҪАБАЛЫҠ ХОҠУҒЫБЫҘ...

## бик борондан

**9 августа Бөтөн донъя аҫаба халыҡтар көнө билдәләнә. Ошо дата айҡанлы тағы бер тапҡыр башҡорттарҙың Башҡортостанда ғына түгел, Ырымбур, Ҡурған, Свердловск, Силәбе, Пермь, Һамар, Һарытау өлкәләрендә, Татарстандың ҡайһы бер райондарында ла төп, аҫаба халыҡты тәшкил итеүен иҫкә төшөрөп алайыҡ әле. Тарихтан билдәле булыуынса, был территориялар өлөшләтә боронғо Башҡорт иле биләмәһе булған. Быны күп кенә боронғо сығанаҡтар раҫлай.**

Шуларҙың иң билдәлеһе - ғәрәп сәйәхәтсеһе Ибн Фаҙландың юлъяҙмалары. Унда ул Башҡорт иле аша үтеүе, болғарҙар, уғыҙҙарҙың башҡорттарға күрше булып тороуы тураһында яҙып ҡалдырған. Был яҙмаларға мең йылдан ашыу ваҡыт үткән. Бөгөн болғарҙар ҙа, уғыҙҙар ҙа юҡ, ә башҡорт әле лә үҙ ерендә йәшәй. Башҡорттоң бик борондан Уралда йәшәүен эпостары, легендалары, риүәйәттәре лә раҫлай. Эпос, мифология барлыҡҡа килгән осор - кешелек аңы үҫешенең бик боронғо дәүере. Тимәк, башҡорттар бик борондан Уралда йәшәгән халыҡ. Хатта монгол-татарҙар ярты донъяны баҫып алған осорҙа ла башҡорттар үҙ еренә аҫабалыҡ хоҡуғын һаҡлап ҡалған. Шәжәрәләрҙән билдәле булыуынса, башҡорт ханы Сыңғыҙхан менән килешеү төҙөп, үҙ ерҙәренең хужаһы хоҡуғын бөйөк илбаҫарҙан раҫлатҡан.

Артабан Мәскәү дәүләтенә ҡушылғанда ла Иван IV башҡорт халҡының үҙ ерҙәренә хужа икәнлеген, аҫабалыҡ хоҡуғын таный. Сөнки Алтын Урҙа заманынан уҡ башҡорттарҙың айырым статус, йәғни аҫабалыҡ хоҡуғы менән файҙаланғанын урыҫ батшалары яҡшы белгән. Башҡорт Рәсәй империяһының көслө экспанцияһына ҡарамаҫтан, үҙенең аҫаба, ер хужаһы статусын 1917 йылға, большевиктарҙың Ер тураһында декреты сыҡҡанға тиклем һаҡлай.

Ә шулай ҙа беҙҙең халыҡты ерле иткән аҫабалыҡ хоҡуғы нимәнән ғибәрәт һуң? Аҫаба ниндәй мәғәнәгә эйә? Башҡортостан энциклопедияһында был турала бына нимә тиелә: "Аҫаба - аҫабалыҡ нигеҙендә законлы рәүештә ер биләү хоҡуғына эйә булған теге йәки был община (ырыу-ҡәбилә, ауыл, олос) башҡорто. "Нәҫелдән-нәҫелгә күсә килгән ер хужаһы" тигән мәғәнәгә тура килә (Рәсәй административ-идара итеү учреждениеларында күберәген "вотчинник" һәм һирәк кенә "аҫаба" һүҙе ҡулланылған). Аҫаба тип иҫәпләнер өсөн билдәле бер башҡорт ҡәбиләһе йәки ырыуының нәҫелдән килгән юридик хоҡуғына эйә булыу, шәхси хужалыҡ алып барыу тейеш тип ҡарала. Билдәле бер социаль-иҡтисади һәм сәйәси шарттарҙа нәҫелдән күсә килгән ергә хоҡуғын юғалтҡан һәм үҙ общинаһынан ҡыҫырыҡлап сығарылған кеше аҫаба була алмай һәм типтәрҙәр йәки керҙәштәр категорияһына күсә.

Башҡорттоң аҫабалыҡ хоҡуғы - ул башҡорттоң ерҙе файҙаланыу һәм ер биләү буйынса ҡағыҙәләр системаһы. Аҫабалыҡ уның үҙ ерҙәрен биләүгә, хужа булыуға һәм унан файҙаланыуға тарих барышында барлыҡҡа килгән хоҡуғы. Аҫабалыҡ хоҡуғына эйә булған кешеләрҙе урыҫтар вотчинник (аҫаба) тип йөрөткән. Башҡорттоң аҫабалыҡ хоҡуғы башҡорт йәмғиәте эсендәге ер мөнәсәбәттәрен, аҫаба башҡорттар менән дәүләт һәм башҡорт ерҙәренә күсеп килгән төрлө категория кешеләре (керҙәштәр) араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яйға һалған. Башҡорт общинаһы (башта ырыу-ҡәбилә берләшмәһе, һуңынан территория) ерҙең коллектив милексеһе булған, шул уҡ ваҡытта общинаның һәр ағзаһы община (вотчина, олос) ере менән файҙаланыуҙа формаль рәүештә тиң хоҡуҡҡа эйә булған.

Башҡорттоң аҫабалыҡ хоҡуғы шарттары яһаҡ түләү һәм хәрби хеҙмәт булған. Яһаҡ түләүҙе башҡорттар үҙҙәренең ергә хоҡуғының гарантияһы тип иҫәпләгән. XIII быуаттан алып XVI быуаттың тәүге яртыһына тиклем башҡорттар ҡайһы дәүләт берләшмәһенә инһә, шуға яһаҡ түләгән һәм хәрби хеҙмәт үтәгән (Алтын Урҙа, Ҡаҙан, Себер ханлыҡтары, Нуғай урҙаһы). Башҡорт ырыу-ҡәбилә башлыҡтары ҡәбилә ерҙәренән файҙаланыуға хандарҙан ярлыҡ алған. Биләмәләр сиктәре тамға менән билдәләнгән. Башҡортостандың Мәскәү дәүләтенә ҡушылыуынан һуң башҡорттоң аҫабалыҡ хоҡуғы Иван IV жалованный грамоталарында юридик яҡтан рәсмиләштерелгән. Әкренләп ырыуҙың йәки ҡәбиләнең территорияһы (вотчинаһы) олос итеп үҙгәртелә. XVIII быуаттың 30-сы йылдарына тиклем батша власы башҡорттоң аҫабалыҡ хоҡуғын һаҡлау сәйәсәтен үткәрә, уны күп тапҡыр раҫлай (1664 йылда Өфө воеводаһына батша наказы, 1682, 1694, 1734, 1739 йылдың 10 августындағы, 1654 йылдың 16 мартындағы, 1755 йылдың 1 сентябрендәге, 1790 йылдың 18 ноябрендәге батша указдары һ.б.). 1736 йылдың 11 февралендәге указы менән батша власы Башҡортостанда әкренләп башҡорттоң аҫабалыҡ хоҡуғын сикләргә һәм бөтөрөүгә йүнәлеш ала. Башҡорттоң аҫаба ерҙәрендә ҡәлғәләр, баструктар һәм заводтар төҙөй башлай. 1917 йылдың 27 октябрендә (9 ноябрендә) Ер тураһындағы декрет борондан килгән был хоҡуҡты бөтөнләй юҡҡа сығара.

**Азат ЮЛАН.**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ИЛЬЯ ЭРЕНБУРГ...

## башҡорттар тураһында

**Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында фронтта һәм тылда "Ҡыҙыл йондоҙ" гәзитенең махсус хәбәрсеһе Илья Эренбургтан да (1891-1967) билдәле яҙыусы булмағандыр, моғайын.**

Хәрби публицист Эренбург хаҡында Константин Симонов түбәндәгеләрҙе әйтеп ҡалдырған: "Ышаныслы кешеләр һөйләүенсә, ҙур партизан отрядтарында ҡулдан яҙылған бойороҡтоң бер пункты булған: "Гәзиттәрҙе, Илья Эренбургтың мәҡәләләре булмағанын уҡығандан һуң, тәмәке төрөү өсөн файҙаланырға мөмкин". Был яҙыусы өсөн мин ҡасан да булһа ишеткән иң ҡыҫҡа һәм иң ҙур баһа.

Һәр ваҡыт фронтта йөрөүсе Эренбургтың публицист таланты һуғыш мәлендә айырыуса ныҡ асыла. Уның патриотлыҡ һәм гитлер илбаҫарҙарына ҡарата нәфрәт менән һуғарылған мәҡәләләре "Правда", "Ҡыҙыл йондоҙ" гәзиттәрендә баҫыла.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Илья Эренбург Башҡорт кавалерия дивизияһы яугирҙәре менән осраша. Осрашыу һөҙөмтәһе булараҡ, "Башҡорттар" очеркы яҙыла.

Башҡортостан улдарының батырлыҡтары хаҡында һөйләгәндә, яҙыусы уларҙың ата-олаталарының ҡаһарманлығын телгә ала: "Күп йылдар элек урыҫ казактары һәм башҡорттар бергәләп ирек өсөн көрәшкән. Башҡорттарҙың етәксеһе батыр һәм шағир Салауат Юлаев булған. 1812 йылда башҡорттар урыҫтар менән берлектә Наполеонды ҡыуған. Француз мемуарисы Дюпюи: "Беҙҙе бигерәк тә һөңгө һәм уҡ менән ҡоралланған башҡорттар ыҙалатты", -тип яҙған. Доктор Мейер тигән кеше: "Шуны өçтәргә кәрәк, Дон далаларында беҙгә башҡорттар ҡәбиләһенә ҡараған ҡурҡыу белмәç кешеләр менән һуғышырға тура килде", - тип яҙып ҡалдырған".

Илья Эренбург Салауат тоҡомдарының исемдәрен һанап китә: "Салауат Кәримов 152 гитлерсыны һәләк итә, Байғужин ут аҫтында яуҙаштарын нисәмә тапҡыр элемтә менән тәьмин итә, Хәйрулла Ҡоломбәтов минометтан фашист ротаһын юҡ итә, лейтенант Мансур Юлдашев Юшков ҡалаһы янындағы алышта легендар батырлыҡ күрһәтә, Мансурҙың биш ағаһы ла фронтта йөрөй... "Батырлыҡ өсөн" миҙалы менән бүләкләнгән Хафиз Мәжитов ҡыҙы Гөлзифаға хатында, фашистарҙы, башҡаса бер ҡасан да беҙҙең ерҙе тапамаһындар өсөн, аяуһыҙ ҡырыуы һәм ҡырасағы хаҡында яҙа. Был һүҙҙәр совет яугирҙәре исеменән".

Әлбиттә, очерк баҫылған гәзитте Башҡорт кавалерия дивизияһы яугирҙәре өйҙәренә ебәрә.

Һуғыштан һуң Илья Эренбург ижадын тыныслыҡты һаҡлауға бағышлай. "Яҙыусылар, - ти ул, - ҡорал тауыш бирмәһен өсөн ҡысҡырып һөйләргә тейеш. Уларҙың тауыштары изге уйлы кешеләргә йүнәлтелергә тейеш".

Илья Эренбургтың эшмәкәрлеген юғары баһалайҙар Башҡортостанда ла. Благовещен арматура заводы эшселәре, инженер-техник хеҙмәткәрҙәре, Дүртөйлө районының Карл Маркс исемендәге сельхозартель ағзалары 1966 йылда Илья Эренбургты СССР Юғары Советының милләттәр советына депутат итеп һайлай. Шул осорҙа Илья Эренбург республика райондарында, Өфөлә халыҡ менән күп осрашыуҙар үткәрә.

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Башҡорттарҙың ер эшкәртеү тарихы тураһында IV бүлектә ентекле яҙыла. Был бүлектә ер эшкәртеү техникаһына айырым иғтибар бирелә. Оҙаҡ йылдар ялан башҡорттарында ер эшкәртеүҙең - күсереү, ә урман башҡорттарында яндырыу һәм көлләндереү системаһы йәшәп килә. Был ике система тураһында ла XVII һәм XVIII быуаттарҙағы документтарҙа иҫкә алына. Ул хатта XIX быуат һуңында ла була. Күсереү системаһы ерҙәре күп булған, бигерәк тә Урал аръяғы башҡорттарында осрай. Ә яндырыу системаһын мин Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышында, Ғәйнә һәм Уран башҡорттарының дачаларында күҙәттем.

Күсереү системаһына ярашлы, бер тапҡыр эшкәртелгән ерҙе өс-дүрт тапҡыр унан бойҙай йәки тары уңышын алғас, бер нисә йылға ял иттерергә ҡалдыралар. Ошо ваҡытта инде икенсе, 10-15 йыл эшкәртелмәй ятҡан ер күтәрелә һәм тағы өс-дүрт йыл йәки ике-өс йыл эшкәртелә. Был ашлама ҡулланылмаған бик ябай ысул халҡы әҙ, ере күп булған осраҡта игенсене тулыһынса ҡәнәғәтләндергән. Уның ере күп булғас, бер генә участканы тәрбиәләү ихтыяжы тыумаған.

Яндырыу йәки көлләндереү системаһы күсереүгә ҡарағанда ла вәхшиҙәрсәрәк булған. Уның өсөн урман, ҡайһы берҙә бер нисә мең гектар, яндырылған. Янған ағастарҙан ҡойолған, янған тамырҙар һәм төпһәләрҙән барлыҡҡа килгән лапы һөҙөмтәһендә яндырылған участканы һөрөү мөмкин булмаған. Урыны-урыны менән генә, тамырҙар араһындағы ер кәйлә йәки кәтмән ярҙамында йомшартылған (77- се һүрәт). Еңелсә генә ҡабаттан тырматылған көллө ҡатламға иген, нигеҙҙә арыш сәселгән. Әммә икенсе, ә ҡайһы бер ваҡыт беренсе йыл иген сәскәндән һуң былдай уңдырышлы ерҙә үлән күпереп үҫә башлаған. Һөҙөмтәлә яндырылған участканы ҡалдырып, яңынан икенсе участка яндырылған.



Ер эшкәртеү хужалығының бындай ике системаһы ошо ваҡытта бик сикле, урындағы характерҙа ғына булған. Өс яланлы система иһә барлыҡ урындарҙа таралыу алған. Был осраҡта эшкәртелгән ерҙәр өс өлөшкә бүленгән, уларҙың икеһенә йыл һайын иген сәселгән, ә береһе, сиратлап, парға ҡалдырылған. Ер менән файҙаланыуҙың был ысулы Башҡортостанда башҡорт халҡына ғына хас булмаған, уны рустар ҙа, рус булмаған башҡа халыҡтар ҙа ҡулланған.

XVIII быуаттың икенсе яртыһында башҡорттар, И. И. Лепехин һүҙҙәре буйынса, күберәген "арпа һәм һоло сәскән, ә арыш икмәге кәрәкмәй тип һаналған". XIX быуат һуңында, XX быуат башында башҡорттар ярауай бойҙай, ужым арышы, бойҙай, арпа, һоло, тары һәм бик һирәк кенә киндер сәскән. Ужым арышын башҡорттар бик аҙ сәскән, һәм был эш август урталарынан сентябргә тиклем башҡарылған. Ғәҙәттә, ошо йылда алынған яңы орлоҡто гектарына ике центнер иҫәбенән сәскәндәр. Ужым арышы август башында йәки урталарында өлгөргән.

**Эштәре, йәшәү рәүештәре менән күптәргә өлгө булырҙай кешеләр, матур ғаиләләр бик күп баш ҡалабыҙҙа ла, республика райондарында ла. Ана шундай татыу, һәр кем һоҡланырлыҡ бер ғаилә - Менәүәрә Исхаҡ ҡыҙы һәм Миңлеғәлим Әхмәҙулла улы БОХАРБАЕВТАР менән әңгәмә ҡорҙоҡ был юлы. Улар баш ҡалабыҙҙан алыҫта ятҡан Хәйбулла районы үҙәге Аҡъяр ауылында йәшәй. Бохарбаевтар менән булған әңгәмәлә, бөйөк яҙыусы һүҙҙәрен үҙгәртеберәк әйткәндә, һәр ғаиләгә хас мәсьәләләр һәм дә мөнәсәбәттәр башҡа ғаиләләрҙекенә оҡшамағанса, үҙенә күрә айырылып торған баҫалҡы бер матурлығында һүрәтләнде.**

# “Уллы булһаң, тигән фекерҙә



*Әле булһа тетрәнеп китәм: ул йылдарҙа балалар үлеме юғары, менингит таралған мәл ине. Сараһыҙҙандыр инде, ҡаты ауырып ятҡан балаларҙың баштарынан һыйпап, ҡулдарынан тотоп ултырған булам: медсестралар юҡ, реанимация юҡ... Пенициллинды тәүлегенә хет ун тапҡыр ҡаҙа - ярҙам итмәй ҙә ҡуя. Ул саҡ антибиотиктарҙың яңы быуыны етештерелмәй ине шул әле. Шул арҡала сабыйҙар үлемен дә йөрәгем аша үткәрергә тура килде, әле булһа әрнейем улар өсөн.*

**▸ Һәр ғаилә Аллаһы Тәғәлә тарафынан, уларҙың һәр икеһе ҡай тарафтарҙа йөрөүенә ҡарамаҫтан, бер-береһенең юлына сығарып ҡуйылған ике йәш йөрәктең ҡауышыуынан башлана. Һеҙҙең танышыу тарихы ҡайҙа һәм нисек башланды?**

**Миңлеғәлим Әхмәҙулла улы:** Икебеҙ ҙә Өфөлә уҡып йөрөгәндә таныштыҡ беҙ. Мин Башҡорт дәүләт медицина институтының икенсе курсында уҡып йөрөй, дөйөм ятаҡта йәшәй инем. Берҙән-бер көндө бер ҡыҙ Сәйет тигән класташын эҙләп, беҙҙең бүлмәгә килеп инде.

**Менәүәрә Исхаҡ ҡыҙы:** Эйе, ауылдаштарым Фәрзәнә менән Сәйетте юллап килһәм, уларҙы тап итә алманым. Бүлмәлә яңғыҙы ғына ултырған Миңлеғәлим "Сәйет күрше ятаҡҡа дискотекаға китте", тине һәм "Әйҙә, теләһәң, уның янына алып барам", тип тәҡдим итте. Мин киттем эйәреп. Барып еткәс, мин урамда тороп ҡалдым, Миңлеғәлим минең дуҫтарҙы саҡырып сығарырға тип ятаҡҡа инеп китте лә... юҡ булды ла ҡуйҙы. Эй, көтөп торам, эй, торам, өшөнөм, аптырап бөттөм. Ахырҙа, ҡул һелтәнем дә ҡайттым да киттем. Ысын, шул саҡ ҡайҙа юғалдың ул һин?

**Миңлеғәлим Әхмәҙулла улы:** Әллә, онотҡанмын инде...

**Менәүәрә Исхаҡ ҡыҙы:** Мин дә был ваҡиға хаҡында онотоп бөткәйнем инде. Яңы йыл алдынан әлеге ауылдаштарым Фәрзәнә менән Сәйет үҙҙәренең ятағына дискотекаға саҡырғас, бергә уҡыған әхирәтем менән шунда киттек. Баяғы ваҡиға тураһында Сәйет белә ине, шуға ла иптәше Миңлеғәлимгә минең алда аҡланыу мөмкинлеге бирергә булғандыр инде. Ятаҡ вахтаһынан беҙҙе ҡаршыларға уны төшөрөп ебәргән. Бына бер заман өҫкө ҡаттарҙан ап-аҡ күлдәктә, галстук таҡҡан, костюм кейгән ҡап-ҡара сәсле матур егет килеп төштө лә, туп-тура беҙҙең эргәгә килеп, мине ҡулымдан уҡ тотоп, әйҙәләп алып инеп китте. Йөҙө бик таныш күренә: туҡта, ҡайҙа күрҙем әле быны, тип баш ваттым уларҙың бүлмәһенә барып еткәнсе. Шунан иҫкә төштө: ул әлеге мине дискотекаға алып барып, ишек төбөндә ҡалдырып киткән Миңлеғәлим булып сыҡты. Шулай итеп, уның менән яңынан таныштыҡ.

**Миңлеғәлим Әхмәҙулла улы:** Дискотеканан һуң Совет майҙанындағы шыршы янына Яңы йыл ҡаршыларға сыҡтыҡ. Туҡтауһыҙ музыка ағыла, бөтәһе лә вальс әйләнә. Шунда Менәүәрәгә ныҡлап иғтибар иттем: бер туҡтамай бейеп, вальс әйләнеп тик йөрөй был- оҡшаттым да ҡуйҙым. Шунан уны берәүгә лә бирмәнем һәм эргәмдән бер ҡайҙа ла ебәрмәнем.

**Менәүәрә Исхаҡ ҡыҙы:** 4-се курста өйләнештек, 5-се курста Айнурыбыҙ тыуҙы. Мин уҡыған БДУ-ның филология факультеты ятағынан беҙгә һәм тағы бер йәш ғаиләгә уртаҡ бер бүлмә бирҙеләр. Бүлмәнең уртаһына шаршау ҡороп, тар ғына бүлмәне киң күреп, матур итеп йәшәнек.

**▸ Икегеҙҙең дә ниндәй ғаиләлә үҫеп, ниндәй тәрбиә алыуығыҙ, атай-әсәйҙәрегеҙ өлгөһө ҡыҙыҡһындыра әле беҙҙе...**

**Миңлеғәлим Әхмәҙулла улы:** Атайым менән әсәйем ғүмер буйы колхозда эшләне. Атай фронттан аяҡ-ҡулы яраланып ҡайтҡан булһа ла бер генә минут та буш ултырманы, бригадир ине - ял тигән нәмәне белмәне. Әсәйемдең дә бөтмөрлөгөнә әле булһа ғәжәп итәм: бер үҙе көнөнә 30-40 һарыҡтың йөнөн ҡырҡа ине. Беҙҙе, балаларын да хеҙмәткә өйрәтеп үҫтерҙеләр. Уҡып йөрөгән йылдарҙа каникулға ҡайтабыҙ ҙа эшкә тотонабыҙ. Атай, әсәй өлгөһө тигәндә, иң беренсе уларҙың эшлекле булыуҙарын әйтер инем. Киң күңелле инеләр, кеше яраттылар. Өйөбөҙ бәләкәй генә булһа ла, бөтә ауыл балалары беҙҙә булды: ҡатыҡ эсеп, беҙҙә йоҡлап, бергә уйнап үҫтек.

**Менәүәрә Исхаҡ ҡыҙы:** Мул ҡуллы, йомарт, ҡунаҡсыл булды ҡәйнәм. Самауыры бер ваҡытта ла һүнмәҫ ине. Урамдан берәйһе үтеп китеп барһа, туҡтатып, хәл-әхүәл белешеп, сәйгә инергә ҡыҫтай башлай. Ә хәбәрҙе килештереп тороп, ҡойоп һөйләй ҙә ҡуя инде быназ - ауыҙына ғына ҡаратып ҡуя ине кешене.

**Миңлеғәлим Әхмәҙулла улы:** Атай ни бары 64 йәшендә донъя ҡуйҙы. Әсәйем тәмәке үләне сәсеп үҫтерә торғайны, шуны тоҡлап һатып, кәсеп тә иткеләне. Атайым ана шул махорканы гәзиткә төрөп, борҡоторға ярата, ә эсеүен эсмәй ине. Үҙе кәүҙәгә мыҡты, ныҡ булды. Фронтта алған яралары өҫтөнә ана шул тәмәке лә сәбәп булғандыр тием унның иртә китеп барыуына... Йәшермәйем: бала саҡта беҙ ҙә шаярғыланыҡ ул тәмәке менән. Зыянын белеп тә бөтмәгәнбеҙҙер, күрәһең. Бәхеткә күрә, был яман ғәҙәтте ваҡытында ташларға көс тапҡанбыҙ үҙебеҙҙә. Хәҙер, шөкөр, ағайым да, ҡустым да тартмайҙар.

**Менәүәрә Исхаҡ ҡыҙы:** Минең атай шахтер булды, әсәйем күберәк йорт-хужалыҡ хәстәрҙәре менән булышһа ла, эшһеҙ ҙә ултырманы. Элек ауыл советы кәнсәһен йыуыуҙы бит, яуаплы эш күреп, унған, намыҫлы кешегә генә ышанып тапшыралар ине. Ул ана шул "мөһим" эште башҡара торғайны. Атайым ике һуғышта: фин һәм Бөйөк Ватан һуғыштарында ҡатнашып, яраланып ҡайтып килгән: снаряд ярсығы янбашын умырып алып киткән булған. Шахтала оҙаҡ эшләп, үпкәһе ташҡа әйләнгән атайым да шулай итеп иртә китте арабыҙҙан: 58 йәш кенә ине уға. Ә бына ҡәйнәм дә, әсәйем дә 90-шар йәш йәшәнеләр. Әсәйем, ғөмүмән, бик сая, ҡыйыу ҡатын ине, йәш саҡта әүҙем комсомол ағзаһы булып, концерттар ҡуйып, "Ғәлиәбаныу"ҙа төп ролдәрҙе башҡарып йөрөгән. Ун бала үҫтек, шуларҙың етәүһе әле иҫән. Әсәйем дә, ҡәйнәм кеүек, иҫ китмәле теремек, тынғыһыҙ булды, ултырып сыҙамаҫ ине. Ике ҡоҙағыйҙың шулай оҙон ғүмерле булыуында, бәлки, тап ошо сифаттар ҙа сәбәп булғандыр? Хәрәкәттә - бәрәкәт, тиҙәр бит ни тиһәң дә. Атайым менән ҡайным яҙмышын уйлайым да, йөрәк һыҙып китә: ысын һуғышты үтеп, ут эсендә йөрөп ҡайтһалар ҙа, бер ниндәй ҡәҙер күрмәне улар. Эшләне лә эшләнеләр. Элегерәк ветерандарға ҡәҙер-хөрмәт тигән нәмә булманы шул...

**▸ Юғары белем алып, үҙ заманығыҙҙың иң модалы, иң хөрмәтле, иң кәрәкле уҡытыусы һәм врач һөнәрҙәренә эйә булып, баш ҡаланан төпкөл Хәйбулла районына ҡайтып төпләнгәнһегеҙ. Йәшәү урынынан, эшегеҙҙән уңдығыҙмы?**

**Миңлеғәлим Әхмәҙулла улы:** Өфөлә уҡыуҙы тамамлағас, мединститутта ҡалдырырға иткәйнеләр. Төрлө яҡлап уйлаштыҡ инде: аспирантурала уҡыуҙы дауам итеү ғаиләнең матди яғына һуғасаҡ, өҫтәүенә, торлаҡ мәсьәләһе лә проблема. Аҡъярға ҡайтып төшкәйнек, "Беҙ һине уҡыттыҡ, әйҙә, үҙебеҙҙә эшлә, районда врачтар етешмәй, педиатр бөтөнләй юҡ", тип, партияның райком секретары ҡулға ике бүлмәле фатир асҡысы тоттороп ҡуйҙы, икеләнеп торорға урын да ҡалманы. Ә эштәр, ысынлап та, бик хөрт ине районда. Ете врач урынына бер үҙемә эшләргә тура килде. Врачтар Аҡъярға килергә бик ашҡынып тормай, сөнки, үҙегеҙ беләһегеҙ, Хәйбулла районы ул йылдарҙа иң үгәйһетелгән, артта һөйрәлгән төбәк ине. Ниндәйҙер күрһәткестәр тураһында һүҙ ҙә булыуы мөмкин түгел. Балаларҙы дауалау өсөн ябай ғына шарттар ҙа булдырылмаған. Ә реанимация тураһында хыялланырға ла түгел ине. Бына шундай шарттарҙа башлап ебәрергә тура килде инде хеҙмәт юлын, ни ҡылаһың - кемдер берәү эшләргә, балалар ғүмерен һаҡларға тотонорға тейеш ине бит. Әле булһа тетрәнеп китәм: ул йылдарҙа балалар үлеме юғары, менингит таралған мәл ине. Сараһыҙҙандыр инде, ҡаты ауырып ятҡан балаларҙың баштарынан һыйпап, ҡулдарынан тотоп ултырған булам - медсестралар юҡ, реанимация юҡ... Пенициллинды тәүлегенә хет ун тапҡыр ҡаҙа - ярҙам итмәй ҙә ҡуя. Ул саҡ антибиотиктарҙың яңы быуыны етештерелмәй ине шул әле. Шул арҡала сабыйҙар үлемен дә йөрәгем аша

***✓ Башҡорт теле дәрестәре бөтөрөлөп, уҡытыу тулыһынса тип әйтерлек рус телендә алып барыла ине. Артабан да хәлдең шулай ҡалыуы мөмкин түгел ине, шуға ла ең һыҙғанып, был проблеманы хәл итеүгә үҙемә тотонорға тура килде.***

үткәрергә тура килде, әле булһа әрнейем улар өсөн.

Бөгөн антибиотиктарҙың ниндәй генә аналогтары юҡ! Шул уҡ ваҡытта вирустар ҙа бер килеш кенә үҙгәрешһеҙ тормай: улар ҙа тышҡы шарттарға, яңы препараттарға яраҡлаша бара. Унының ҡарауы, 35 йыл буйы район педиатры булып эшләүем осоронда күп нәмә үҙгәрҙе: тейешле шарттар ҙа, заманса аппаратуралар ҙа, кадрҙар ҙа бар - эшлә генә. Минең 67 йәшлек шулай уҡ оҙаҡ йылдар табип булып эшләгән Ғәли ағайымдың ҡыҙы Айгөл дә педиатр. Тимәк, алмаш бар, тыныс күңел менән ял итергә лә була.

**Менәүәрә Исхаҡ ҡыҙы:** Алмаш, тигәндән, өс улыбыҙҙың ҡыртһаң, һөйләшеп тә тормай, туҙынып сығып китеүселәр ҙә булды. Шундай саҡтарҙа мәктәптең беренсе директоры, эшлекле, аҡыллы зыялыларыбыҙҙың береһе (ҡыҙғанысҡа, арабыҙҙан бик йәшләй китте) Хөсәйен Әйүп улы Ниғмәтуллиндың ярҙамы ҙур булды. Миңлебикә Мырҙабулатова, Рәйлә Асҡарова, Әлимә Мәксүтова кеүек бынамын тигән башҡорт теле уҡытыусыларынан коллектив тупланды һәм, шулай итеп, башҡорт кластары асып ебәрҙек. Йәшәүе лә, эшләүе лә күңеллерәк булып китте. Бөтә көсөмдө башҡорт теле уҡытыуға ғына сарыф итермен, тигән теләкте тулыһынса бойомға ашырып булманы: мәж-

**тәрбиәһендә, бигерәк тә малайҙарҙы ир еткереүҙә үҙегеҙгә генә хас ғаилә тәжрибәһе һәм алымдары барҙыр?**

**Миңлеғәлим Әхмәҙулла улы:** Бер ниндәй ҙә махсус алымдар ҡулланып ултырманыҡ, әлбиттә. Әйтеүебеҙсә, икебеҙҙең дә эштән баш сыҡманы. Өйҙә хеҙмәткә, бер-беребеҙгә һәм, ғөмүмән, донъяға ҡарата ниндәй мөнәсәбәт күреп-тойоп үҫһәләр, шундай кешеләр, белгестәр, ғаилә башлыҡтары - ирҙәр һәм атайҙар булып өлгөрөп еттеләр. Өсәүһе лә юғары белемле, үҙҙәренең мөкиббән киткән һөнәрҙәре, матур, татыу ғаиләләре бар. Беҙ үҙебеҙ ата-әсә өлгөһөндә үҫтек, балалар ҙа, күрәһең, шуны ҡаһенсә уларҙы эшкә өйрәтеү маҡсатынан ине.

**Менәүәрә Исхаҡ ҡыҙы:** Әйткәндәй, йорт-хужалыҡ тотоу килендәр өсөн дә ниндәйҙер кимәлдә хеҙмәт мәктәбе булып тора, тип әйтер инем. Өйҙәге, хужалыҡтағы бар эштәргә шулай уҡ килендәрҙе лә йәлеп итергә тырышабыҙ. Йыл да һуғым һуябыҙ, бергәләп ҡаҙы эшләйбеҙ. Ҡайным, ҡәйнәмдән ҡалған йола буйынса, һуғымды өлөшләп балаларға таратабыҙ. Умарта тотабыҙ.

▶ **Беҙҙең "Ғаилә ҡоро" әңгәмәһендә кесе киленегеҙ Римма ла ҡатнаша. Бохарбаевтар ғаиләһе һәм айырыуса ҡәйнә-килен мөнәсәбәттәре**

**Миңлеғәлим Әхмәҙулла улы:** Ысынлап та, яңы тыуған сабый үҙ исеме менән тыуған һымаҡ тәьсир ҡалдыра ул. Хатта уларға "Азамат", "Сәлимә" йә башҡа исем менән өндәшке килә. Ә ата-әсә тота ла уларға башҡа төрлө исем ҡуша. Хәҙер балаларға ниндәй генә исемдәр ҡушмайҙар! Улар күберәк исемгә түгел, ә ҡушаматҡа оҡшап тора бит. Балаға исемде ата-әсә бик уйлап ҡушырға тейеш, сөнки исем киләсәктә баланың яҙмышында, фиғелендә сағылыш табасаҡ. Беҙҙең улдарыбыҙҙың исемдәренә килгәндә, тыуғанда уҡ ул маңлайҙарына яҙылған һымаҡ ине. Хәҙер ейән-ейәнсәрҙәребеҙ исемдәрен дә бергәләп һайлайбыҙ.

# БОЛЛО БУЛЫРҺЫҢ”,

## Бохарбаевтар

береһе лә аталары юлын һайламаны, сөнки уның нисек эшләгәнен күреп үҫтеләр - эштән ҡайтып инмәй ине: йә төн уртаһында саҡыртып алалар, йә сираттағы ауырлы ҡатын бала таба, йә дежурҙа тороп ҡала... Шулай итеп, балалар аталарын өйҙә күрмәнеләр ҙә. Байрамдарҙа ла юҡ эргәлә, бар сараларға үҙемә генә йөрөргә тура килде улдарымды етәкләп. Шулай тиһәм дә, мин дә муйындан эшкә сумғайным. Ул саҡтарҙы иҫкә төшөрһәң, беҙ эшләнек микән шуларҙың бөтәһен дә, тип, ышанмай кителә.

Ҡыҫҡаһы, башҡорт теле уҡытыусыһы булараҡ, үткән быуаттың 80-90-сы йылдарындағы туған тел мәсьәләһенә бәйле бөтә ауырлыҡ-ҡаршылыҡтарҙы баштан ғына түгел, йөрәк аша үткәрергә тура килде. Аҡъяр урта мәктәбендә хеҙмәт юлымды башланым. Башҡорт теле дәрестәре бөтөрөлөп, уҡытыу тулыһынса тип әйтерлек рус телендә алып барыла ине. Яңы мәктәп төҙөлөп, шунда күскәс тә йыл самаһы шулай дауам итте. Артабан да хәлдең шулай ҡалыуы мөмкин түгел ине, шуға ла ең һыҙғанып, был проблеманы хәл итеүгә үҙемә тотонорға тура килде. Әлбиттә, башлаусыларға бер ваҡытта ла еңел булмай. Ул саҡта, ысынлап та, башҡорт теле уҡытыусыларына ҡытлыҡ ине. Булғандарын да оҙайлы көн төркөмдәренә тәрбиәсе итеп күсереп бөткәндәр. Тәүҙәрәк, шулай итеп, төшкә тиклем дә, төштән һуңғы сменала ла башҡорт теле дәресен бер үҙемә уҡытырға тура килде. Сәғәттәр һаны аҙнаһына 48-гә барып етә торғайны. Өҫтәүенә, программалар, дәреслектәр ҙә юҡ. Ата-әсәләр араһында ҡаршылыҡ бик көслө: балаһын туған телендә уҡытып, "наҙан ҡалдырыуҙан" ҡурҡҡан маңҡорттар байтаҡ ине ул йылдарҙа Аҡъярҙа. Осрашып-аңлашыуға са-

бүр итеп тигәндәй, фекерем менән дә иҫәпләшеп тормаҫтан, завуч итеп тәғәйенләнеләр. Үҙ предметынан ғына уҡытып йөрөгән уҡытыусыны иң бәхетле кеше тип иҫәпләйем мин шуға күрә лә. Минең хәҙер ваҡыт яғы тағы ла ҡыҫылды, ләкин йәш саҡ, дарманлы саҡ - шәхси тормошоң, аҡса мәсьәләләре менән иҫәпләшеү уйы башта ла юҡ. Түләүһеҙ түңәрәктәр алып барабыҙ, бейеү ансамбле (студент саҡта БДУ-ның бейеү ансамблендә шөғөлләнеү ярап ҡалды бит), фольклор түңәрәктәре ойоштороп, үҙем сценарийҙар, пьесалар яҙып, башҡортса театр ҡуйып, кисәләр үткәреп, өйгә төн урталарында ҡайтып ингән саҡтар йыш була ине. Миңлеғәлимгә рәхмәт, бер ваҡытта ла тыйманы, һүҙ әйтмәне - ул мине аңлай ине: милләтебеҙҙе ҡотҡарайыҡ, телебеҙҙе йәшәтәйек, тип тырыштыҡ, яныып-ярһып эшләнек бит. Шуға әйтәм дә инде: хәҙер ышанмай торола ул саҡ эшләгәндәргә... Урындағы халыҡтың, ата-әсәләрҙең, иң мөһиме, балаларҙың рухын күтәрә алдыҡ - шуның менән бәхетлемен. Эшемде күрә, баһалай белделәр, унының ла рәхмәтлемен. "Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы", уҡытыусы-методист исемдәре бирелде. 2008 йылда иң яҡшы уҡытыусы исемен, РФ Президенты Грантын яулауым да эш һөҙөмтәләренә баһа булды.

▶ **Береһенән-береһе матур, эшсән, тәртипле өс улығыҙҙы нисек тәрбиәләнегеҙ? Бала**

батлай. "Ояһында ни күрһә, осҡанында шул булыр", тигән бит халҡыбыҙ аҡылы ла. Улдарыбыҙ хатта кәләштәрен дә әсәйҙәренә оҡшатып һайлап өйләнделәр.

**Менәүәрә Исхаҡ ҡыҙы:** Аллаға шөкөр, улдарыбыҙ өсәүһе лә аҡыллы, тәртипле, маҡсаттарына ынтылышлы, тырыш булып үҫтеләр. Иң өлкәне Айнур - юрист, Сибайҙа үҙенең адвокат контораһы бар. Киленебеҙ Айгөл ЗАГС идаралығы етәксеһе. Ҡыҙҙары Нәркәс туғыҙынсы класты тамамланы, улдары Ихсан үҫеп килә. Уртансы улыбыҙ Урал - иҡтисадсы, Сургут ҡалаһында "Уралсиб" банкының бүлек начальнигы, Лариса киленебеҙ өйҙә игеҙәк улдар - Сыңғыҙ менән Ғимранды үҫтерә. Кинйәбеҙ Юлдаш эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнә, уҡыған һөнәре буйынса - юрист. Римма киленебеҙ - биология уҡытыусыһы, әлеге мәлдә шулай уҡ өйҙә Арыҫланды ҡарай. Өс улыбыҙҙа өс төрлө характер, ләкин уларҙы ана шул үҙ маҡсаттарына ынтылышлы, уға өлгәшеү юлында ныҡышмал булыуҙары берләштерә.

**Миңлеғәлим Әхмәҙулла улы:** Ваҡытында Менәүәрә менән икебеҙҙе лә Сибайға эшкә саҡырһалар ҙа, барманыҡ, балаларҙың үҙ нигеҙе булырға тейеш, улар эшкә өйрәнһен, тип уйланыҡ. Малайҙарға хеҙмәт тәрбиәһе булыр, тип үҙебеҙ йорт һалдыҡ. Улдарыбыҙ ең һыҙғанып алып, бергәләп төҙөштө уны, аҙаҡ, мәле еткәс, үҙҙәренә лә йорт һалдылар. Йорт-ҡура, мал тотоу ҙа күбе-

**хаҡында уның фекерен дә тыңлап алайыҡ әле.**

**Римма килен:** Мин үҙем Йылайыр районынан. Ҡара диңгеҙҙә ял итеп ҡайтып килә инем, Юлдаш менән осрашып таныштыҡ. Күп тә тормй, ул мине үҙҙәренә - Аҡъярға саҡырҙы. Юлдаштың әсәһе лә, атаһы ла миңә тәү күргәндән үк оҡшаны. Ҡәйнәмдең мине күптәнге танышы һымаҡ, алсаҡ йөҙ менән әйҙүкләп ҡаршылауы бөгөнгөләй күҙ алдымда тора. Ете йыл бер йортта бергә йәшәнек, бер тапҡыр ҙа әрләшеү, үпкәләшеү тигән нәмә булманы. Донъя көтөү, бала ҡарау, аш-һыу әҙерләү кеүек эштәрҙә ҡәйнәмдән күп нәмәгә өйрәндем, рәхмәт уға!

**Менәүәрә Исхаҡ ҡыҙы:** Килендәремдең ҡайһыһы булһа ла минең турала яман һүҙ әйтмәҫ, моғайын. Эшләһәләр, үҙҙәре белеп эшләнә, мин ҡыҫылып, аҡыл өйрәтеп, мыжып йонсотманым уларҙы. Тормош бит, төрлөсә булып китәлер, ләкин, тәрбиә эше миңә мәктәптә лә еткән, тип, өндәшер урында ла телемде тыя инем. Улар ҙа бит кемдеңдер ҡәҙерле балаһы, әйтергә теләгән урында ла телеңде тешләйһең дә түҙәһең инде. Ҡәйнә булыу - үҙенә күрә бер сәнғәт, тигән фекерҙәмен мин үҙем.

▶ **Улдарығыҙҙың, ейәндәрегеҙҙең исемдәре иғтибарҙы йәлеп итеп тора. Бала донъяға үҙ исеме менән тыуа, тигәнде Миңлеғәлим Әхмәҙулла улы балалар врачы булараҡ та белә торғандыр, моғайын...**

▶ **Туғандар, дуҫ-иштәр менән аралашып, ҡунаҡлашып йәшәйһегеҙҙер, моғайын. Бындай бурыстарҙы нисек атҡараһығыҙ?**

**Менәүәрә Исхаҡ ҡыҙы:** Элегерәк, йәш саҡтарҙа ғаилә дуҫтарыбыҙ күп ине. Байрамдарҙы, тыуған көндәрҙе бергә йыйылышып, матур итеп үткәрә торғайныҡ. Һәр осрашыуға ентекләп әҙерләнәбеҙ, сценарийҙар төҙөйбөҙ, гәзит сығарабыҙ хатта... Хәҙер бер аҙ һүрелдек. Күрәһең, йәш торошона ҡарап, донъяға ҡараш та, байрамдар ҙа үҙгәрә, дуҫтарҙың да бик һирәктәре генә тороп ҡала. Әлбиттә, башҡорттоң йола байрамдары барыбер беҙҙең яҡтарҙа һәр ғаиләлә һаҡлана инде ул. Мәҫәлән, һуғым ашына саҡырышыуҙы йыл да көтөп алабыҙ. Матур табын ҡороп, айыҡ итеп аралашыу йолаға әйләнеп бара хәҙер, шуға ҡыуанам. Олоғая барған һайын тормош асылы, йәшәү мәғәнәһе тураһында күберәк уйланырға, дин нигеҙҙәре һәм ҡанундарының тормошобоҙҙағы урынын билдәләп, Аллаһы Тәғәлә ҡушҡан изге юлға ныҡлап аяҡ баҫырға ваҡыттыр, тигән фекерҙәмен.

***Ул саҡта, ысынлап та, башҡорт теле уҡытыусыларына ҡытлыҡ ине. Булғандарын да оҙайлы көн төркөмдәренә тәрбиәсе итеп күсереп бөткәндәр. Тәүҙәрәк, шулай итеп, төшкә тиклем дә, төштән һуңғы сменала ла башҡорт теле дәресен бер үҙемә уҡытырға тура килде. Сәғәттәр һаны аҙнаһына 48-гә барып етә торғайны. Өҫтәүенә, программалар, дәреслектәр ҙә юҡ. Ата-әсәләр араһында ҡаршылыҡ бик көслө: балаһын туған телендә уҡытып, "наҙан ҡалдырыуҙан" ҡурҡҡан маңҡорттар байтаҡ ине ул йылдарҙа Аҡъярҙа. Осрашып-аңлашыуға саҡыртһаң, һөйләшеп тә тормай, туҙынып сығып китеүселәр ҙә булды.***

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бына ошондай ҙур, матур ғаилә менән күрешеп, бер-нисә сәғәт кенә аралашыу форсаты тейҙе беҙгә Аҡъярҙа. Халҡыбыҙҙа, ҡунаҡ аҙ ултырып күп һынар, тигән бер тапҡыр әйтем йәшәй. Бохарбаевтар менән беҙҙең осрашыу тап ошо әйтемдәгенә тап килеп тора: ҡорған матур, етеш донъялары, иркен, яҡты йорттары, унан да яҡтыраҡ күңел түрҙәре, аҡыллы һәм халыҡсан фекерҙәре, береһенән-береһе уңған, изгелекле, эшсән балалары менән улар бик күптән бергә аралашып йәшәгән яҡын кешеләр булып хәтерҙә ҡалды...**

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА**
**яҙып алды.**

*✓ Алмагөл иһә Фәрит күҙҙән юғалғансы солан күтәрмәһендә торҙо, кәртә аша аҫмалы күпер яғына күҙ һалды. Шундай-шундай вәғәҙәләр бирешкәс, бер үпәс итеп ҡалһа ни булған инде, эй, һантый…*






- Вәт те бызаука! - Ҡыҙ тел сартлатты, кескәй приборҙы нығыраҡ ҡыҫып.

...Әгәр риза икәнһең, юлланайыҡ ғәзиз тауыбыҙға. Көҙгө сыуаҡта..."

- Ә ниңә көҙ? Ней, Фәрит... - Алан-йолан ҡарանғас, ҡыҙ ҡото алынғандай ҡысҡырып ебәрҙе. - Фәри-ит! Ҡасҡалаҡ быҙаумы әллә һин?

Фәрит, тыңлаусан балалай йүгереп, Алмагөлгә яҡынлашты. Ҡулында - бер услам ялан сәскәләре.

- Әү, тим, әү, Алмас... Ҡырғараҡ барҙым, сәскә һирәк... Тыңланыңмы бынауҙы... Аҙағынаса?

- Әү, зәбзәү! Әллә ҡайҙа йөрөй... - Гөлләмәне алды ҡыҙ һәм тыныслана төштө. - Уф, рәхмәт. Рәхәт булып китте күңелгә.

- Тимәк, һин риза?

- Юҡ, әлегә юҡ. Рәхмәт әйтеү ризалыҡ буламы ни? - Алмагөл уйынлы-ысынлы хискә бирелде. - Боронғо йола буйынса... вәғәҙәне Ҡолоҡай ишетергә тейеш. Ә ниңә "көҙгә" тигән шарт ҡуя был тәтәйең? Йәғни, һөйләфуның? Мә, үҙең тыңла аҙағын.

- Бәй, иртә буламы? - Мобилканы алған егет күңелһеҙләнде кеүек.

- Һуң була, сөнки мине... ысынлап урлауҙары ихтимал. Урлап булһа ла барыбер алам, тип әйткән, ти, бер, ә юҡ, утыҙ туғыҙлы ике буйҙаҡ - шуларҙан ҡурҡам.

- Берәү генә түгел, хатта икәүме? Тәк-тәк, тиме әле Мирза ағайың? Тә-әк, берәүһе анауҙа, шыршы эргәһендә, ат ашатҡан. Арба тиһәң... Резина тәгәрмәсле кырандастыр. Закон ҡаты... Ҡурҡма... Ҡыҙ урлау хәҙер киноларҙа, театрҙа ғына.

- Ҡурҡам: урмансылыҡ академияһын бөтөрһәң - ике дипломың булыр, ә мин, культпросвет кимәлендә әҙ генә эш хаҡына йөрөһәм, ай-һай, әҙәмгә һанарһыңмы икән?

- Кит, ауыҙыңдан ел алһын. Улайһа, мыҙылмай-нитмәй, алдағы аҙнала уҡ Ҡолоҡайға менәбеҙ. - Егет ҡыҙҙы үҙенә һырыҡтырып, ҡосаҡламаҡ иткәйне, нәҡ шул мәл яҡындараҡ төн ҡошо имәнес ҡаҡылдағас, Алмагөл ҡурҡышынан ситкә тайшанды.

- Абау Аллаҡайым, ниндәй бапаҡ ул?

- Өкө, шикелле. Үҙен берәй ер йәнлеге өркөткәндер.

- Киләһе аҙнала уҡ, тинеңме? Әгәр барһаҡ... Мобилка ла кәрәкмәҫ... Булғас, боронғоса булһын - үҙебеҙҙе мең-мең йыл элекке тау башҡорто һымаҡ хис итер өсөн милли костюм кейербеҙ. Клубтыҡын... - Ҡыҙ, хыялға бирелеп, сәскәләрҙе еҫкәй-еҫкәй түшенә терәне. - Ҡайттыҡ әйҙә. Һинекеләрҙе белмәйем, иллә өләсәмдең ҡобараһы осҡандыр. "Әсәң киткәс, атаң үлгәс, детдомға бирмәнек, үҙем үҫтерҙем һине", тип һөйөнә хәҙер.

Фәрит сумкаһын яурынына йәтешләп аҫты, тик атларға ашыҡманы.

- Ишетеп кенә беләм әсәйеңде. Хат килгеләйме һуң үҙенән?

- Бик һирәк... Йәш ире менән йылы яҡҡа олаҡты... Хатының да, аҡсаһының да, үҙенең дә хәжәте юҡ. Рәхмәт, әлбиттә, донъяға тыуҙырған өсөн... Олатайым иртәрәк донъя ҡуйҙы. Өләсәм генә иҫән-һау булһын. Алмагөлдөң туйын күрһәм, зерә бәхетле инер инем гүрҙәргә, тип тә әйткеләй. Фатиха һорарбыҙ үҙенән.

- Әйткәне юш килһен әбейүшкәндең, әй, өләсәй... өләсәйеңдең.

- Теләге ҡабул була торған уның. Мирза ағайымды ауырыуҙан кеше иткән изге йән ул... Мә курткаң, йылындым.

- Ней, Алмас... Һиңә... ней, бүләгем бар ине, - Фәрит, нишләргә белмәй, баҙап ҡалды. - Осһоҙло ғына...

- Дөрөҫ тотлоғаһың: төндә бүләк бирмәйҙәр.

- Ә сәскәне... алдың бит?

- Сәскәләрҙе тәүлек әйләнәһенә бүләк итергә мөмкин.

- Әйҙә, Алма, улай булғас... Иртәгә лә көн бар.

Алмагөл алдан ҡырсын юлға төшөп алды ла үпкәләгән ҡиәфәттә дауам итте.

- Иртәгә лә көн бар... Әллә килмәҫкә уйлайһыңмы? План ҡорор инек. Хәйер, мин ҡорҙом инде: тәүҙә - никах. Шунан - поход. Аҙаҡ - туй. Әллә походмы тәүҙә?

- Киләм, киләм, - тип ҡарһаланды егет, аныҡыраҡ белеште. - Ҡасан?

- Төш ауғас клубҡа кил. Сәскә тотоп!

- Уныһы... - тип ыуаланды Фәрит. - Әллә нисек бит әле.

- Эй ҙә, ҡасан ауыл егеттәре ҡыҙҙар менән осрашыуға сәскә тотоп йөрөр икән?

- Ней...

- Кеше юҡта биргәнгә төрттөрәм инде. Рәхмәт, кәнишне, рәхмәт. Ней... Ней... Тәүҙә походмы, әллә?

Фәрит бары тик көләмһерәгәндәй итте. Алмагөл дә берауыҡ һүҙһеҙ атланы. Атлауҙары әллә ни ыраманы - ауылға тиклем саҡрымдай араны һәләк оҙаҡ үттеләр, сөнки тәүҙә шарлама аша һалынған аҫмалы күпергә барып әйләнделәр. Тулған ай шаһит: ҡыйыуһыҙ ғына ҡосаҡлаштылар. Шул саҡ күпер бәүелгәндәй иттеме, әллә шулай тойолдо ғынамы - белмәҫһең.

Алмагөлдәрҙең ҡапҡаһы төбөнә еткәс, ҡыҙ ярым бышылдап һорай ҡуйҙы:

- Ҡара әле, Фәрит, һыбай барабыҙмы, йәйәүме?

Ҡайҙалыр сәүек тауышлы эт өрҙө, баяғы һыйырҙы индерҙеләрме - ҡапҡа зыңҡылдап ябылды. Инде ғашиҡтар бөтөнләй бышылдауға күсте. Был инде һөйләшеүҙәренә сихрилек, серлелек тә өҫтәне.

- Ҡыҙыҡ, мин дә шул хаҡта уйлабыраҡ тора инем. Теләһәң, лесхоздан ат һорап алам. Ун саҡрым ни, бүстәк кенә лә.

- Эй ҙә, йәйәү генә барайыҡ. Унда ат йөрөрлөк әмәл юҡтыр ҙа әле. Ҡолонташҡа сетка аҫтынан инеп була тиме. Рәхмәт, оҙаттың...

-Мотлаҡ киләм. Хуш, Алмас.

- Ней, Фәрит, ике көндән, йәме? Иртә ятып, торорбоҙ таңғы дүрттә! - Ҡай арала ныҡлы фекергә килгәндер, Алмагөл бер тынала өҫтәне. - Көндөҙ урманда ял итербеҙ. Әҙ-мәҙ йоҡланыр, әгәр арыһаҡ, тим.

Арыуҙарын еңеп, Фәрит аҫмалы күпер аша үҙ урамына ынтылды. Ярһыу тау йылғаһы - Шарлама аръяғында йәшәй егеткәй. Замансараҡ йорт-ҡаралты байтаҡ унда. Лесничество ла шунда, ә заказник дирекцияһы - ҡасабала, шуға бында йәшәп, унда штатта торғандар бар. Фәриттең атаһы, мәҫәлән, заказник ветераны, өс йылмы инде хаҡлы ялда. Улай ҙа тик ятмай, биомузейға ҡырағай ҡош-ҡорт һындарын ҡатырып яһай, мөгөҙ-фәлән табып бирә.

Алмагөл иһә Фәрит күҙҙән юғалғансы солан күтәрмәһендә торҙо, кәртә аша аҫмалы күпер яғына күҙ һалды. Шундай-шундай вәғәҙәләр бирешкәс, бер үпәс итеп ҡалһа ни булған инде, эй, һантый... Юҡ, юҡ, һантый түгел, инсафлы, тотанаҡлы. Үбер әле, танһығы ҡанғансы үбешерҙәр.

* * *

Кескәй генә йылҡы өйөрө киткәс тә ситлеккә яҡын саңдауҙа Алма менән Фәрит күренде. Икеһе лә күҙ яуын алырлыҡ милли кейемдә, һанда-һаяҡ гәпләшеп алалар.

- Эҫе ныҡлап төшкәнсе етергә тырышайыҡ. Арымаһыңмы әле, Алмагөл?

- Ҡатын-ҡыҙ михнәттәргә түҙем, тиҙәр. Ә үҙең?

- Юҡ та... Һыуһатҡан һымаҡсы.

Аҡлан уртаһына еткәс, егет - тубыҡтарын ололарса бөкләп, ә ҡыҙ янтайып ергә ултырҙылар. Фәрит "пионерский" рюкзактан һурған ҡауырһын шешәнән алмаш-тилмәш һөтһөҙ сәй уртланылар.

- Мирза ағайымдың, Ҡолонташ эргәһенән шишмә аға, тигәне иҫтә. - Алмагөл, тауышына үкенес ғәләмәте сығармаҫтан, өҫтәп ҡуйған булды. - Беҙҙе бында ирәүән йөрөйҙәр тип башына ла килтермәҫ әле бахыр. Йә, никахһыҙ-ниһеҙ... ҡара таңдан егет етәгендә юлға сыҡсы. Ә, юҡ, Фәрит, үкенмәйем. Үҙем, үҙем романтик сәфәр теләнем!.. Мирза ағайымды бәғзеләр аңлап бөтмәй.

- Тарзан?.. - Фәрит сикәһен "быраулап" бөтөрмәй белеште. - Уның хәбәренә ышанырға мөмкинме ни?

Алмагөл турһайып апаруҡ һүҙгә етте:

- Ағайҙы иҫәр, меҫкен тип уйлайһыңмы? Яңылышаһың! Мине тәрбиәләп үҫтерешмәһә лә, өләсәйемдән ҡала иң яҡын, кәрәгендә яҡлашырға әҙер ҡанҡәрҙәшем ул Тарзан тигәнең.

- Үпкәләмә, Алма, - тине Фәрит итәғәт менән. - Китап яҙмалы һүҙ таралған бит уның хаҡында.

- Яҙ, әйҙә, кем ҡаршы. Ғорур, намыҫсан, әммә бәхетһеҙ кеше, тип яҙ.

- Ҡыйыш-мыйышты ишеткәнмендер. Асығын белмәгәс... - Фәрит аҡланған ҡиәфәттә урынынан торҙо.

- Күптәр белмәй шул... Күҙе төшә ағамдың поселокка йөрөп уҡығанда берәүгә. Ҡыҙ ҙа уны ярата, хатлашалар... Армиянан ҡайтҡас та яусы ебәрә - бирмәйҙәр, үҙе барып инәлеп ҡарай - отказ. - Алма ашыҡмай ғына иҫтәлеккә бирелде. - Ике нәҫел электән тәмһеҙләшеп йәшәгәндәр, имеш. Беҙҙекеләрҙән берәү 37-лә олаталарын раскулачить итеүҙә ҡатнашҡанмы... Бирмәгәстәр, ағайым еңгәмде эйәртеп ала ла китә.

- Магнит яғынамы?

- Эйе. Фатир табып, эшкә урынлашып, тормош ҡороп ебәрәләр. Ҡайталар байрамда поселокка - ҡоҙа индермәй. Беҙҙекеләр тегеләрҙе ҡунаҡҡа саҡырып, көс-хәл никах уҡытырға килешәләр. Инәлтеп кенә килгәйнеләр, мин бәләкәйерәк саҡта.

- Лутсы килмәһәләр икән!

- Ҡуй инде... - Алма уфтанып алды. - Ике ҡайнағаһы эсеп-нитеп алған да, ағайымды һарайға индереп, имгәткәнсе туҡмаған. Ҡурҡышынан ҡоҙа үҙе ялыу бирә: йәнәһе, Мирза йәше етмәгән ҡыҙын урлап алып киткән, көсләп бисә иткән. Ҡулға алғас, ағайымды ике милиционер ҙа типкеләй. Ҡоҙаның самогоны иблескә әйләндергәндер инде менттарҙы. Ике йыл йөрөп ҡайтты әллә төрмәнән, әллә "химия"нан. Ауырыуға һабышып...

- Шунан психбольницаға эләгәме әле ул? - Фәрит хәбәрен өҙҙө.

- Уныһы аҙаҡ... Бер йәйҙе ерле юҡтан урманға киткеләп йөрөнө. Еңгәйҙе - еңгә тигән булам һаман меҫкенде - боҙоҡ туғандары өркөтөп-әүрәтеп горыд абышҡаһына биргәс... Ярты йылдан, ҡасып тигәндәй, саҡ ҡотолдо психушканан ағам. Тикшерелеп торҙо әллә ҡайҙарға барып. Хәҙер башы ла, ҡулы ла теүәл. Гәзит уҡый, клубҡа килгеләп, шахмат уйнай. Сәхнәнән йырлатҡаным да бар үҙен. Тик йүнле кәсеп юҡ шул ауылда.

- Эше табылыр ҙа ул яйлап... Яңғыҙ олоғайыуы йәл.

- Һи-и, үҙенә ымһынған тол апайҙар быуа быуырлыҡ. Берәйһен димләһәң, һеҙҙән бисә таптырған кеше бармы, ти ҙә тыя.

- Ауырыған сағында кешегә һис оронмаған, әйтәгүр... Шулай тиҙәр. - Фәрит үҙ хәбәренән үҙе шикләнгән кеүек. - Әлләсе...

Алмагөлдөң тауышынан иһә Мирзаны йәлләү ҙә, яратыу ҙа сағылғандай.

- Нәҙегерәк сүс арҡанмы, парашют бауымы йөрөткән. Өҫкәрәк менеп, шул беше бау менән төндәрен үҙен ағасҡа сырмап йоҡлаған.

- Ҡош-ҡорт талап китмәһен тигәндер. - Фәрит быны иғтибарлап тыңлауын белдерер өсөн генә әйтте. - Күргән нужаларҙы!

- Бер саҡ урманда һыбайлы ят лесник бәйләнә быға: ҡороулы мылтыҡ төҙәй, атынан алда атларға бойора, - ҡыҙ ҡул хәрәкәте менән теге булып ҡыланды. - Асыуынан ағайым арҡан ташлап һөйрәй ҙә төшөрә тегене эйәренән. Шунан яманаты тарала, йәнәһе, Мирза - разбойник, Мирза - бальнуй... Ҡушамат тағалар - Тарзан. Ҡуй инде, ҡуй. Төрмәлә туҡмалғанда тештәре һына, шуға элек шышылдап ҡына һөйләште, ти өләсәм. Хәҙер бик тотлоҡмай.

Фәрит бер килке ләм-мим торҙо. Алмагөл, һөйләгәндәрен күҙ алдына баҫтырыпмы, ҡапыл шөбһәләнде.

- Әйҙә, ҡайтайыҡ та китәйек, һиҙеп ҡалһалар, беҙҙе лә ләститкә күмерҙәр!

- Күмһендәр. Ә беҙ татыу ғына донъя көтөрбөҙ.

Бик тыныс, ышаныс, өмөт менән әйтелде был.

- Никахта кеше аҙ булыр, ә туйға күберәк тауыш итербеҙ, эйеме, Фәрит?

- Минекеләр ни, ярты ауыл инде. Поселокта ла зат-ырыу байтаҡ.

Икеһе лә бар аҙға шымып ҡалды.

-Ни күрһәк тә бергә йәшәрбеҙ, айырылышмаҫбыҙ, йәме. Атайһыҙ үҫеүҙең уғата ҡыйын икәнен беләм мин...

- Хафаланма, Алмаҡай, беҙҙең затта ғаилә боҙоу юҡ әлегәсә... Яратмағас - башламайҙар, башлағас - ташламайҙар... Йыр ҙа әйтә быны! - Егет шаяртып мобилкаһын баҫҡыланы.

- Бәғзе ҡатындар, ирһеҙ ҙә йәшәй алам, тип йыуата үҙҙәрен. Эстәрендә барыбер ҙә ут ҡайнай уларҙың. Ташламаҫһыңмы мине?

- Юҡ тинем бит! - Фәрит ерҙән ҡоро сыбыҡ алып, юрамал киҙәнде. - Ҡатын алһаң - ҡотон ал...

- Йәл, әртислеккә уҡымағанһың! - Алмагөл йылмайыуын юйҙы һәм, хискә бирелеп, йыр тыңларға кереште.

*Иртәнсәкәй тороп тышҡа*
*сыҡһам,*
*Ал ҡояшҡай ҡалҡа йылмайып,*
*Ҡоштар һайрауынан Урал*
*яңғырай,*
*Кәкүк саҡыра саңҡып,*
*моңайып…*

**(Дауамы бар).**

ЗАУЫҠ

Тамара ҒӘНИЕВА

# "...МИНЕ ЛӘ ЯРАТ, БАШҠОРТОСТАНЫМ!"

### Башҡортостаным

Хыялыма килде ирек биргем:
Остом!
Талды
Ҡанат остарым.
Ҡошсоҡ ҡына булып
йыр сығарҙым,
Һоҡланыуҙан,
Башҡортостаным!

Илгенәмә сикһеҙ мөхәббәтем
Йәрем,
Балам ише мөҡәддәс
Бер кисереш ине...
Изге хистәр
Фиғелемде тотош биләгәс,

Һомайғоштай һауаланым,
Барыһын
Ҡурсалағым килде...
Илаһым...
Башҡортостан!
Ғәзизлегең ҡәҙерен
Төшөнөүҙән -
Тере иманым.

Бөркөт булып ҡараным мин
бер саҡ
Һәм татыным үрҙәр ҡосағын.
Баш әйләнер ҡая,
Бейеклектән
Бөйөклөгөң дәүмәлдәрен үлсәп,
Тетрәндем мин,
Башҡортостаным!

Ер шарына,
Тимәк , тупрағыңа
Бәрелеп, булды, танау ҡанаттым.
Үсекмәнем,
Һөйгәненә тоғро
Йәр шикелле һине яраттым.

Тик һин шаһит:
Булды яңылышҡаным,
Абынғаным булды, -
Осҡаным.
...Һин дә мине,
Үтенәм,
Үлгәс түгел,
Бөгөн ярат,
Башҡортостаным!

### Э-һей, кешеләр!

Күңелем ҡайтып
бынау донъяһынан,
Яңғыҙ кеүек тойғас үҙемде,
Асмандарын байҡап күңелемдән,
Сөңгөләргә сәнстем күҙемде.
Һәм һораным:
- Эй, ҡөҙрәтле баҡый!
Ғаләм киңлектәре,
Һин ниңә
Нәк ошонда миңә урын бирҙең,
Ник килтерҙең ошо ерең?

Өнһөҙ генә түгел,
Битараф та
Йыһан киңлектәре -
Яуапһыҙ.
Табандарым ҡубып ер өҫтөнән
Күтәрелдем күккә -
Ҡанатһыҙ.

Ҡарағыҙсы әле, ерҙәштәрем,
Юғарыла икән хозурлыҡ.
Тыйыуҙар юҡ бында,
Ҡалыптар юҡ,
Тоҙаҡтар юҡ сикләп торорлоҡ.

Эй, кешеләр!
Күккә ҡарағыҙ бер,
Күтәрелһенсәле башығыҙ.
Сылбырлаған мал, дан ҡоллоғонан,
Үҙегеҙҙән бер аҙ ашығыҙ.

Кешеләр өнһөҙ...
Иңкәйешеп алып
Танауы йә аяҡ осона,
Машиналы,
Атлы,
Йәйәүҙәре
Ерҙең барса зиннәт-гәүһәрҙәрен
Һоҫоп ҡалайым тип ҡырсына.

Нишләп ҡомһоҙ,
нишләп нәфселе беҙ?
Ер һиммәтле, зиннәт бихисап.
Күңелең күккә күтәрелмәй тороп
Бәрәкәтһеҙ бит ул иҡтисад.

Кемуҙарҙан тигән дау, ярыштан,
Яу, һуғыштан нәфсе хаҡына,
Арына алмай ҡаңғырышҡан беҙҙең
Зыу килеүҙе күреп
Аллаһ... көлә
Ятып күктең ете ҡатына.

### Аңлар мине

Беҙҙең яҡтың былбыл, сонарҙары
Бер килмәгәндә лә бер килеп,
Сутылдығын сығып китә әле
Йәнгенәмә моңло ғәм тиреп.

Үҙебеҙҙең яҡтан иҫкән елдәр
Әллә ялҡау,
Әллә һауалы.
Алып килмәй Наҡаҫ туғайҙары
Етештергән затлы һауаны.

Үтеп бара ана ялдарына
Таҫма суҡлап алған понизар.
Әйтер берәү:
"Юрға кәрәкме ни?
Ситтә йәшәп ошо шағирҙар
Ностальгия тигән ҡурай тартып,
Илде һағынып хәбәр һатырҙар".

Шулай ҙа ул...
Әммә ил-төйәктән
Алыҫ ерҙә билен бөккәндәр
Аңлар мине.
Ватан ҡәҙерҙәре
Ҡиммәтләнә ситкә киткәндән.

### Бөгөн, иртәгә

Бөгөнгә көн никтер шәп булманы,
Бөгөн никтер юл да уңманы.
Иртәгәһен Сәмре ҡанаттары
Ҡурсаясаҡ минең донъяны.

Бөгөн никтер еле ҡаршы булды,
Ир мыжыны,
Хужа үсекте.
Әхирәттәрем дә бушамаймы,
Берен килеп ҡаҡһа ишекте.

Һыуға төштө балта,
Кәрәк һынды.
Әйҙермәне һәүкәш еленен.
Күк йөҙөнөң һис бер алһыуы юҡ,
Ҡымтылған уй.
Асмай иренен.

Иртәгәһен
( Алла бирһә инде),
Бөгөн түҙҙениһәк,
Шәп булыр.
Илемә лә,
Минең донъяма ла
Бәрәкәтле ырыҫ һыйынып.

Бөгөн, эйе, никтер эс бошмалы,
Улай булмаясаҡ иртәгә.
Бөгөнгегә күсеп төп башына
Ултыртыптар ғына китмәһә.

...Бөгөнгеләй йәшәп булманы һис,
Иртәгәлә гелән өмөт, уй.

Ул иртәгә алыҫ икән дә ул...
Һонолаһың - ары,
Етмәй буй.

### Ысынмы?..

Аяҙ көндә йәшен,
Ҡышҡы ләйсән.
Ҡая ҡырлап елгән күк юртаҡ
Тертләткәндәй,
Тетрәндерер өсөн
Яуланыңмы мине ҡороҡлап?

Йәшәүенең ҡото китте, тиеп,
Күнеп бөткәс-икәс,
Ҡояштың
Артынан да ҡалмай,
тағылып йөрөп,
Нур теләнгән Айға мин үҙемдең
Фиғелемде шул саҡ оҡшаттым.

Яуҙы сыуаҡ,
Инде нәзәкәтлек
Үрәпсеүҙән арыған иңемә.
Донъя йәнә минең яҡлы ине,
Ғүмер тәме балдан татлы ине,
Һорғолтлана яҙған күҙемә

Яғылдымы йәйғор буяуҙары?
(Илап ирей йәнем ҡырауҙары),
Ҡарашыңдан илһам осондо.
Әле барыбер ышанмайымсы мин...
Һин әйткәндәр...
Ысын-ысынмы?..

### Ҡыҙ-ҡырҡын

Ҡәҙерһеҙләп әрһеҙләнә никтер,
Ҡульяулыҡтан осһоҙ ҡыҙ-ҡырҡын.
Этеп йығып хәжәт үтәй ирҙәр,
Тәләфләйҙәр донъя, Ер ҡотон.

Кәйеф-сафа,
Тәгәм тулы ерҙә
Инабат юҡ никтер ҡыҙҙарға.
Ҡабырғаңды үҙең
"Кем алыҡ?" тип,
Сығарып элеүме был баҙарға?

Һыуаҡ аҡса кеүек, ҡулдан-ҡулға
Тапшырыла.
Осһоҙ
Ҡыҙ-ҡырҡын.
Илгә кемдәр инәй булыр бер саҡ?
Заманаға үгәй - тәтәй ҡурсаҡ
Тере күҙе иман юҡлыҡтын.

### Үҙ ишең

Һалыбыҙға нисек эләккәндер,
Йыбырлыгын сыға бер бөжәк.
Яҡлау эҙләп микән,
Күңелдәшме,
Уска һыйынып бара.
Илгәҙәк.

Нух кәмәһе түгел,
Һал ғына бит,
Ҡыҙыҡһыныу бында тарттымы?
Нәҫелдәштәреңме рәнйетте лә
Үсектеңме?
Күңелең ҡайттымы?

Ә тегендә, алыҫта, тим инде,
Кемгә икән тейер кәрәгең?
Үрсеү һәләтең дә барҙыр әле,
Иш табырға барҙыр теләгең.

Уң ярҙамы һине ҡалдырайыҡ,
Һул ярҙамы табылыр үҙ ишең?
...Кай ерҙәрҙә ниндәй нәҫел ҡалыр?
Шуны уйла, зинһар, шуны уйла
Үҙ илендән яҙһаң,
Эй кешем!

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән тәнәлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# МАТДИ ХӘЛЕБЕҘ АРЫУ,

## рухи донъябыҙға иғтибар итәйек

**Нурмөхәмәт НУРЫЕВ, дин белгесе:**

- Әлеге ваҡытта матди донъябыҙ етеш - ашарыбыҙға ризыҡ, кейеребеҙгә кейем бар, шулай уҡ һәр кемебеҙгә эшләү, һаулығыңды нығытыу, ғаиләң ҡороу, матур балалар тәрбиәләү мөмкинлеге лә бирелгән. Йәштәребеҙ белемен артабан камиллаштырыуға өмөт итә алыуы менән дә башҡаларҙан бәхетлерәк. Аллаға шөкөр, был йәһәттән зарланыр урын юҡ. Ләкин ҡайһы бер ауырлыҡтар ҙа бар. Икенсе яҡтан, улар булмаһа, был донъя мәңгелек донъяға әйләнер һәм беҙҙең әхирәткә китке лә килмәҫ ине, моғайын. Әлеге донъянан да хәйерлерәк, камилыраҡ булған мәңгелек донъя барлығын иҫтән сығарырға ярамағаны өсөн дә, бәлки, ебәреләләр ул ауырлыҡтар.

Ә бына ысын мәғәнәһендә саң ҡаға торған күренеш - ул рухи донъябыҙҙың намыҫ, күңел сафлығы, кешелеклелек һымаҡ төшөнсәләре онотола барыуы, тип билдәләр инем. Рухи ҡиммәттәрҙе һаҡлап ҡалыу йылдан-йыл, хатта көндән-көн ауырлаша. Шуға ла иманлы кешеләргә күңел аҡлығын, күңел изгелеген мөмкин тиклем нығыраҡ асырға, таратырға, үҙ сафына мөмкин тиклем күберәк кешеләрҙе ылыҡтырырға кәрәк. Кешеләр яман ҡылыҡтарға ғына түгел, яҡшыһына ла эйәрә, тик уларҙы матур өлгә аша инандыра белеү фарыз. Ул сағында иманлылар тағы ла күбәйер, йәмғиәтебеҙ ҙә үҙ сафлығын һаҡлар ине.

Ҡиммәттәребеҙҙе заманыбыҙ өсөн актуаль интернет технологияларын әүҙем ҡулланып, улар ярҙамында ла һаҡлап ҡалырға тырышырға кәрәк. Сөнки, телебеҙ, тарихыбыҙ онотолһа, динебеҙҙән тайпылһаҡ, милләтебеҙ ҙә юҡҡа сығасаҡ. Тарих - киләсәк нигеҙе, ә тел һәм иман - рухыбыҙ ныҡлығын тәьмин итеүсе ике бағана. Ни өсөн бөгөн аҡты - ҡаранан, яҡшыны - ямандан, дөрөҫлөктө ялғандан айырыуы ауырлашты? Сөнки, бер хәҙистә әйтелгәнсә, Мөхәммәт бәйғәмбәр ерҙән киткәндән һуң өс быуат үткәс, уның эҙенән барыусыларҙың һәр көнө алдағыһынан ҡыйыныраҡ булыр, тиелә. Бөгөн беҙ был һүҙҙәрҙең дөрөҫкә сығыуын күрәбеҙ: күптәр спиртлы эсемлектәрҙән, тыйылған бүтән нәмәләрҙән арына алмай, ҡайһы бер йәштәребеҙ төрлө ҡан-ҡойошло урындарға атлығып, агрессив төркөмдәр йоғонтоһона бирелә, һәм башҡалар. Беҙҙән һуңғы быуындарға тағы ниндәй рухи һынауҙар кисерергә тура килер икән, әйтеүе ауыр. Шулай ҙа, ҡыйын ваҡыттарҙа килеп тыуған һорауҙарға яуапты ҡайҙан табырға белмәй албырғап ҡалған саҡта, дини белеме булған имамдарға ҡолаҡ һалһын ине милләттәштәрем.

Илгизәр БУЛАТОВ яҙып алды.

*✓ Үҙгәрештәргә ярашлы, хатта танытманан ҡолаҡ ҡағырлыҡ хоҡуҡ боҙоу күҙәтелгәндә лә, мәсәлән, инспектор протокол төҙөп, уны судҡа ебәрергә тейеш. Суд ҡарары көсөнә ингәнсе танытма водителдә ҡала.*



ИНТЕРНЕТТАН



# БӘХЕТ ГОРМОНЫ...

## томатта һәм бороста

■ Суинберн университеты ҡарамағындағы кеше психофармокологияһы үҙәге ғалимдары әйтеүенсә, көн һайын бер сынаяҡ какао эсеү баш мейеһе эшмәкәрлеген яҡшырта. Белгестәр быны эсемлек составындағы файҙалы флавоноидтар менән аңлата. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, был матдә эшсе хәтерҙе яҡшырта. 30 көн дауамында какао эскән оло кешеләрҙең дә баш мейеһе эшмәкәрлеге күпкә әүҙем булғаны асыҡланған. Ғалимдар фаразлауынса, какао составындағы флавоноид берләшмәләре мейегә арырға форсат бирмәй.

■ Йәшелсә-емеш яратыусылар араһында кишер һәм сливаға өҫтөнлөк биреүселәр башҡаларға ҡарағанда һөйкөмлөрәк була икән. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, тиреһенең төҫө алтынһыу булған ир-егеттәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар тирә-яҡтағы кешеләргә матурыраҡ һәм сәләмәтлеге яҡшыраҡ булып күренә. Һиндостандың Сент-Эндрюс һәм Бристоль университеттары үткәргән тикшеренеүҙәрҙә асыҡланыуынса, ҡайһы бер йәшелсә менән емеш-еләк тирегә матур төҫ бирә. Ғалимдар әйтеүенсә, составында каротиноидтарға бай йәшелсә һәм емеш-еләк ярҙамында тиренең торошон бер нисә ай эсендә яҡшыртырға мөмкин.

■ Кембридж университеты ғалимдары белдереүенсә, депрессиянан ябай кетчуп ҡотҡара ала. Тик күңел яраларына дауа булһын өсөн кетчуп ҡағиҙәгә ярашлы әҙерләнергә һәм унда томат һәм ҡыҙыл борос күп булырға тейеш. Тап томат һәм ҡыҙыл бороста "бәхет гормоны" - серотонин күп. Кетчуптың шулай уҡ яман шештәргә ҡаршы тороу үҙенсәлеге лә бар, был аҙыҡты яратыусылар йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренә лә бирешеп бармай. Составында ликопен тигән көслө антиоксидант булыуы ла томатты файҙалы ризыҡтар исемлегенә индерергә мөмкинлек бирә. Ликопен яман шешкә тәьҫир итеү көсөнә эйә, ул үҫемлек майы менән яҡшыраҡ үҙләштерелә. Тап ликопен томатҡа сағыу төҫ бирә лә инде. Фруктоза, глюкоза, шулай уҡ минераль тоҙҙар - магний, йод, цинк, натрий, тимер, марганец, A, B2, B6, K, PP, E витаминдары нервылар системаһы эшмәкәрлегенә лә яҡшы йоғонто яһай. Томаттың тышы ашҡаҙан-эсәк тракты эшмәкәрлеген әүҙемләштерә, орлоҡтары ҡанды шыйыҡайтыусы матдәгә бай, һөҙөмтәлә, тромбоз барлыҡҡа килеү хәүефе түбәнәйә. Томат ни тиклем яҡшыраҡ бешкән, унда файҙалы матдәләр ҙә күберәк була. Шулай уҡ ҡыҙыл томат һарыһына ҡарағанда күпкә файҙалыраҡ.

■ Диабет менән яфаланыусылар әстерхан сәтләүеге ярҙамында ҡан тамырҙары һығылмалығын арттыра ала. АҠШ-тың Нью-Хейвен университеты ғалимдары белдереүенсә, был иң уңайлы һәм ябай ысул булып тора. Тикшеренеүселәр уртаса 58 йәштәрҙәге диабет сирлеләр төркөмөн күҙәткән. Сирлеләр көнөнә мотлаҡ 56 грамм әстерхан сәтләүегә ашаған һәм эксперимент аҙағына уларҙың ҡан тамырҙары һығылмалығы артҡан, дөйөм һәм "зарарлы" холестерин күләме кәмегән. Сәтләүектәрҙең юғары калориялы булыуын иҫәпкә алып, дауаланған саҡта ғалимдар тән ауырлығын даими күҙәтеп торорға кәңәш итә.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ЭСКӘНҺЕҢ ИКӘН...

## ҡайт та ят!

**1 сентябрҙән Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодексҡа һәм "Юл хәрәкәте именлеге тураһында"ғы закондың 28-се статьяһына индерелгән нуль промиллеһен бөтөрөү тураһындағы үҙгәрештәр нигеҙендә водителдәргә яңы штраф санкциялары ҡулланыла башлаясаҡ.**



Ябайлаштырып әйткәндә, хәҙер эскән тип тотолған, әммә махсус ҡорамал ярҙамында тикшерелгән водитель алкотестер өргәндән һуң уның организмында 0,16 мг-дан кәмерәк күләмдә спирт булыуы асыҡлана икән, ул эскән тип иҫәпләнмәйәсәк. Ул ғына ла түгел, быға тиклем ошо сәбәпле танытмаһын алдыртҡан водителдәр документтарын суд аша юллай ала. Әгәр алкотестер организмдағы спирт күләмен 0,16 промилленән күберәк тип билдәләй икән, уға әлегә тиклемге ҡағиҙәнән, йәғни йыл ярымдан алып ике йылға тиклем танытмаңдан ҡолаҡ ҡағыуҙан тыш, 30 мең һум штраф та түләргә тура киләсәк. Медицина тикшереүе үтеүҙән баш тартҡан осраҡта ла шундай уҡ яза көтә. Эскән килеш ҡабат руль артына ултырған йәки эскән кешегә автомобиль менән идара итеүгә рөхсәт биргән өсөн штраф күләме 50 мең һум буласаҡ. Ул ғына ла түгел, машина менән идара итеү хоҡуғынан өс йылға мәхрүм ителәсәкһегеҙ. Танытмаһы алынған килеш тә тәүбәһенә ҡайтмай эскән килеш машина менән идара итеп эләккән водителдәрҙе 10-15 тәүлеккә ҡулға алыу йәки, законға ярашлы граждандары ҡулға алыу мөмкин булмаһа, мәҫәлән, йөклө ҡатын-ҡыҙ, 30 мең һум штраф көтә.

Ләкин хәҙер гаишниктар танытманы шунда уҡ алып ҡала алмай. Шулай уҡ транспорт сараһы менән ваҡытлыса идара итеүгә рөхсәт ҡағыҙы ла артабан булмаясаҡ. Үҙгәрештәргә ярашлы, хатта танытманан ҡолаҡ ҡағырлыҡ хоҡуҡ боҙоу күҙәтелгәндә лә, мәҫәлән, ҡаршы яҡ һыҙатҡа сығыу, инспектор протокол төҙөп, уны судҡа ебәрергә тейеш. Суд ҡарары көсөнә ингәнсе танытма водителдә ҡала. Ҡарар сығып, документын тапшырған көндән генә яза мөҙҙәте иҫәпләнә башлай. Әгәр водитель шунда ла тәкәбберлегенә барып, һаман да руль артына ултыра икән, тотола ҡалһа инде уға 30 мең һум штраф түләргә тура киләсәк.

Тағы шуға ла иғтибар итергә кәрәк: әгәр әлегә тиклем штраф күләме 5 мең һумдан да артмаһа, хәҙер улар бер нисә тапҡырға артты. Шул уҡ ваҡытта максималь штраф күләме (50 мең һум) генә түгел, штрафтарҙың түбәнге планкаһы ла 100-300 һумдан автоматик рәүештә 500 һумғаса күтәрелде. Мәҫәлән, рөхсәт ителгән тиҙлекте 10-20 километрға арттырған өсөн хәҙер бөтөнләй яза ҡаралмаһа, уның ҡарауы 20-40 километрға арттырыу 500 һумға барып баҫа. Тиҙлек тигәндән, хәҙер бында бөтөнләй яңы - сәғәтенә 80 һәм унан да күберәк километр тигән сик бар. Тиҙлекте быңдай арттырыу 5 мең һумға барып баҫасаҡ йәки ярты йылғаса танытмағыҙ менән хушлашып торорға тура киләсәк.

Тағы шундай штрафтар ҡаралған: быға са йәйәүле ҡағиҙә боҙоп, 200 һум түләп ҡотолһа, 1 сентябрҙән уға 500 һумын сығарып һалырға тура киләсәк; велосипедсылар, мопедта йөрөүселәр өсөн был сумма шулай уҡ 200-ҙән 800 һумға үҙгәрә; хәүефһеҙлек ҡайышын эләктермәгәндә - 500-ҙән 1000 һумға; балаларҙы махсус ҡулайламаларһыҙ йөрөткәндә - 500-ҙән 3000 һумға; юл ситенә сыҡҡанда - 500-ҙән 1500 һумға; йәйәүлеләргә өҫтөнлөк бирмәгәндә - 800-ҙән 1000-1500 һумға; кеҫә телефоны менән гарнитураһыҙ ҡулланғанда - 300-ҙән 1500 һумға; светофорҙың рөхсәт бирмәгән утына үткәндә - 1000 (штраф үҙгәрешһеҙ ҡала), был хәл ҡабатланғанда - 5000 һум йәки 4-6 айға тиклем танытманан мәхрүм итеү; ваҡыты сыҡҡан транзит номеры буйынса йөрөгәндә - 300-800-ҙән 5000 һумға тиклем штраф йәки өс айға тиклем водитель таныҡлығынан мәхрүм итеү; тимер юлын үткәндә ҡағиҙә боҙғанда - 100-ҙән 1000 һумға тиклем штраф ҡарала.

Әйткәндәй, Беларусь Республикаһында эскән килеш руль артына ултырып бер тапҡыр тотолған водитель икенсе тапҡыр эсеп эләкһә, уның автомашинаһы тартып алына. Беҙҙең закон сығарыусылар йыл һуңына тиклем шундай "мин-мин" водителдәр өсөн тағы ла ҡатыраҡ яза яҙылған ҡанун ҡабул итмәксе: уларҙың машиналарын тартып алмаясаҡтар, ә транспорт хужаһын енәйәт статьяһы буйынса төрмәгә ултыртасаҡтар. Ә был күптәр өсөн карьераға юл ябасаҡ: хөкөм ителһәләр, уларға дәүләт вазифалары тураһында онотորға тура киләсәк!

Шул уҡ ваҡытта РФ Президенты Владимир Путин РФ Һалым кодексына ҡиммәтле еңел автомобилдәргә транспорт һалымын иҫәпләгәндә ҡулланылған коэффициенттарҙы аныҡлаусы төҙәтеүҙәр индерҙе. Был үҙгәрештәр 2014 йылдың 1 ғинуарынан ғәмәлгә инәсәк.

Әгәр автомобилдең хаҡы 3-5 миллион һум икән, уның "йәше" бер йыл булғанда 1,5 коэффициенты, ике йыл булғанда - 1,3, өс йыл булғанда 1,1 коэффициенты ҡулланыласаҡ.

Әгәр автомобилдең хаҡы 5 миллиондан 10 миллионға тиклем (Audi R8, R8 Spyder, R8 GT, S8; Jaguar XK, XKR, Convertible, Maserati, Mercedes CL-class, Porshe 911 Cabriolet, Panamera), йәше биш йылға тиклем икән - һалым 2 коэффициентын ҡулланып иҫәпләнәсәк.

Әгәр "тимер ат" 10 миллиондан 15 миллионғаса (Aston Martin Rapide S, Viraqe, Bentley Continental, Supersports, Ferrari 458 Italia, Lamborqhini Gallardo, Porche 911GT) булып, йәше 10 йыл икән, 3 коэффициенты ҡулланыла.

Әгәр автомобиль 15 миллион һумлыҡ һәм унан да юғарыраҡ (Aston Martin DBS Volante, Ferrati F12berlinetta, Lamborqhini Aventador, Maybach, Rolls-Royse Phantom), ә йәше 20 йыл икән, шулай уҡ 3 коэффициенты ҡулланыла.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1434 һижри йыл.*

| Июль - август | Иртәнге намаҙ | Ҡояш сыға | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 6, шишәмбе | 5:07 | 6:37 | 14:30 | 20:36 | 22:06 | 23:36 |
| 7, шаршамбы | 5:08 | 6:38 | 14:30 | 20:33 | 22:03 | 23:33 |
| 8, кесе йома | 5:10 | 6:40 | 14:30 | 20:31 | 22:01 | 23:31 |
| 9, йома | 5:12 | 6:42 | 14:30 | 20:29 | 21:59 | 23:29 |
| 10, шәмбе | 5:14 | 6:44 | 14:30 | 20:27 | 21:57 | 23:27 |
| 11, йәкшәмбе | 5:16 | 6:46 | 14:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |
| 12, дүшәмбе | 5:18 | 6:48 | 14:30 | 20:23 | 21:53 | 23:23 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ*

# УРАҘА ҒӘЙЕТЕ МӨБӘРӘК БУЛҺЫН!

**Аллаһы Тәғәлә бер ай буйы ураҙа тотҡан мосолмандарға, бүләк йөҙөнән, Ураҙа байрамын биргән. Был көндө мосолмандар иртә менән торғас та, ғөсөл ҡойоноп, үҙҙәренең тәндәрен паклап, бер аҙ ашап ала ла, матур яңы кейемдәрен кейеп, мәсеткә йүнәлә. Ҡояш сығып, бер ярты сәғәт үткәс йәиһә һуңыраҡ ғәйет намаҙы башлана.**

Кем был айҙа Аллаһы Тәғәләгә ихлас ышанып, уның сауабына өмөт итеп, ураҙа тотҡан, Аллаһы Тәғәлә уның гонаһтарын ғәфү итә. Шуға күрә мосолман кеше ураҙа бөткәненә түгел, ә ураҙа мәлендә Аллаһы Тәғәләгә ғибәҙәт ҡылып, гонаһтарҙан ҡотолғаны, Аллаһы Тәғәләнең рәхмәтенә өлгәшкәне өсөн ҡыуана. Был көндө бик матур байрам итеп үткәрергә кәрәк, сөнки Аллаһы Тәғәләнең бүләген ҡабул итә белеү үҙе бер сәнғәт.

Ошо көндәрҙә беҙҙең өҫтәлдәребеҙ ҙә байрам күренешле булырға тейеш. Мосолмандар, хәлдәренән килгәнсә, тәмле ризыҡтар бешерә, туғандарының, бер-береһенең хәлен белешә, ҡунаҡҡа саҡырыша, байрам менән ҡотлай. "Ғәйет байрамы мөбәрәк булһын", "Һине Ғәйет байрамы менән ҡотлайым" тип әйтеп, бер-береңде ҡотларға кәрәк. Был көндө мохтаждар ҙа, ярлылар ҙа, етемдәр ҙә байрам итә. Сөнки башҡа мосолмандар уларға фитыр саҙаҡаһы бирә. Ошо рәүешле динебеҙ бөтөн кешеләрҙең хәлен яҡшыртырға теләй. Был көндә зыяратҡа барып, әруахтарҙы иҫкә алыу ҙа изге эштәрҙән һанала.

Әлбиттә, ҡайһы бер ҡәрҙәштәребеҙ ураҙа тотмағандыр, әле бының кәрәклеген аңлап етмәгәндер. Иллә-мәгәр Аллаһы Тәғәләнең рәхмәте киң, ул ураҙанан башҡа ла гонаһтарыбыҙҙан таҙарынырға, ғибәҙәттәр ҡылырға мөмкинлек биргән. Ҡайһы берәүҙәр: "Ураҙа айында Аллаһы Тәғәлә ҡушҡанса йәшәргә тигән ниәтемде тормошҡа ашырасаҡмын", - тип әйтә. Ләкин был ғәмәлде ҡасан атҡарғанда ла була, уны кисектерергә ярамай. Аллаһы Тәғәләнең рәхмәт ишектәре һәр ваҡыт асыҡ. Әгәр ҙә ошо динде ихлас күңелдән ҡабул итһәк, уны өйрәнеп, күңелебеҙгә индерһәк, шунда беҙ ысын мәғәнәһендә бәхет табырбыҙ. Күп кешеләр бәхет эҙләй. Кемдер уны - аҡсала, кемдер - сәләмәтлектә, ҡайһы берәүҙәр юғары вазифаға өлгәшеүҙә күрә. Ләкин быларҙың барыһы ла ваҡытлыса ғына булыуы ихтимал. Күп байҙар, сәләмәт кешеләр үҙен бәхетһеҙ тоя. Бәхетһеҙ оло түрәләр бар. Шуға ла Ислам диненә ҡайтып, Аллаһы Тәғәлә ҡушҡанса йәшәп, тыйылғандан тыйылып, үҙебеҙҙе бәхетле итәйек. Бер кем дә донъяға мәңгегә килмәгән, бөгөн иҫәнбеҙ, һау-сәләмәтбеҙ, ә иртәгә ҡәбер ҡуйынында ятыуыбыҙ ихтимал. Йәштәр ҙә, йәшбеҙ әле, пенсияға сыҡҡас баҫырмын әле намаҙға, тип уйламаһын. Йәш ваҡытта һабаҡтарҙы ҡабул итеп, аңлап ҡалһаң, артабан уны дауам итеп алып китеүе еңел була. Сөнки уйһыҙ йәшәй биргән һайын, гонаһ ҡылған һайын, кешенең күңеле ҡарая. Аҙаҡ кешенең һуңғы сиккә килеп етеүе лә ихтимал. Ул саҡта, теләһә лә, Аллаһы Тәғәләнең юлына ҡайта алмаясаҡ.

Шуға ла йәштәргә әйтер инем: күңелегеҙ таҙа, боҙолмаған саҡта дин юлына килегеҙ. Оло йәштәгеләр ҙә өмөттәрен өҙмәһен. Аллаһы Тәғәлә әйткән бит: "Кем дә кем миңә ҡаршы бер аҙым яһай, мин уға табан ун аҙым эшләрмен", - тип. Аллаһы Тәғәләнең юлына аяҡ баҫһаҡ, ул беҙгә ысын мәғәнәһендә ярҙам итер, уның мәрхәмәтен, көсөн тойорбоҙ.

**Азат ШӘРИПОВ.**

*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК ҠАРТЛАС

Сибайға килгәс, бынан өс тиҫтәнән ашыу йыл элек эшләп киткән мәктәптә белем алған уҡыусыларымдың береһен осратып, әңгәмәләштем. Исеме иҫтә ҡалдырыу өсөн ауыр булмаһа ла, уны барыһы ла Гапуй тип йөрөтә. Миңә уны йәшлек йылдарында уҡытырға тура килмәне. Әммә Гапуй минең уҡыусыларымдың барыһын да белә һәм иҫләй. Унан имен ғаиләнән, төҙөүселәр династияһынан булған төплө нигеҙле, тәртипле малай тураһында һорайым. "Күптән түгел үлеп ҡалды. Магнитогорск тау институтын тамамланы. Инженер-төҙөүсе булды. Өйләнде. Улы тыуҙы. Әммә һеҙ бит, Самат Әбдрәхимович, беҙҙең илдә төҙөүсе булыуҙың нимә аңлатҡанын беләһегеҙ. Эшендә "янды". Икенсе уҡыусым хаҡында һорашам. "Зонала", тип яуаплай. Өсөнсөһө тураһында һорайым, "үлде", ти.

Өнһөҙ генә уҡыусыларымдың тиңдәшенә ғәйепле ҡараш ташлайым. Өлкәнәйгән йөҙ, таушалған иҫке кейем. Гапуй бер ерҙә лә эшләмәй. Үҙенең алкоголикка әйләнгәнен дә йәшермәй. Был бәләкәй ҡаланың урамдарын таң менән ҡыҙыра башлай һәм кискеһен ярымиҫерек хәлдә өйөнә ҡайтып йығыла. Үҙ ғаиләһе юҡ - ата-әсәһе менән йәшәй. Бер һүҙ менән әйткәндә, минең алдымда 45 йәштәрҙәге түбәнгә тәгәрәгән кеше тора. Әммә һөйләшеү манераһында, таузышының тирбәлешендә һәм һаран ғына ым-ишараһында йәшлегемдә уҡытҡанда дүртенсе синыфта булған ихлас, изге, ғәҙеллек яратыусы баланы күреп ҡалам. Ул йылдарҙа Гапуй тыуған ҡалаһының ярымасарбағы булыуын күҙ алдына ла килтермәгәнен аныҡ беләм.

Хәҙерге мәктәп һәм башҡа белем биреү учреждениеларының эшмәкәрлегенә баһа биреү ысулы, мәктәптән алыҫ торған кешеләр уйлап тапҡан күп һанлы рекомендациялар бер ниндәй ҙә тәнҡитте күтәрә алмай. Мониторингтың ҡатмарлы схемаһы, баһалауҙың таблица ысулы һәм мәктәптәрҙең эшмәкәрлеге һөҙөмтәлелеге үҙгәреүен билдәләү ысулы файҙаһыҙ ғына түгел, хатта зыянлы икәнен беләм. Мәғариф системаһының проблемаларынан алыҫ торған кешеләргә, әлбиттә, статистика мәғлүмәттәренән тыш мөмкин түгел. Миңә, мәктәп эшен ишетеп кенә түгел, уртаһында ҡайнап йөрөп белгән кешегә, мәктәптең яҡшымы, насармы икәнен асыҡлау өсөн бер көн мәктәп буйлап йөрөп, икенсе көн бер нисә дәрескә инеп ултырыу, ҡайһы бер документтарҙы ҡарап, уҡыусыларҙың эшмәкәрлеге һөҙөмтәләре менән танышыу ҙа етә. Бына педагогик коллективтың эш сифатын һәм уҡыусыларҙың тәрбиә кимәлен билдәләүсе ябай һәм хаҡ критерийҙар. **(Таблицаны ҡарағыҙ).**

Әммә урта дөйөм белем биреү мәктәбенең эшмәкәрлегенең иң һөҙөмтәле һәм дөрөҫ күрһәткесе - уны тамамлаусыларҙың яҙмышын ун йыл үткәндән һуң тикшереү. Нисек кенә әхлаҡһыҙ тойолмаһын, һәр сығарылыш вәкиленең яҙмышындағы фажиғә һанын асыҡларға һәм уларҙы түбәндәгесә бүлергә кәрәк: 1) суицид ҡорбандары; 2) үлеүселәр; 3) хөкөм ителеүселәр; 4) асарбаҡтар; 5) яңғыҙ бала тәрбиәләүсе ҡатындар; 6) айырылыусылар; 7) сит илгә китеүселәр; 8) эскеселәр; 9) наркомандар. Алынған һандарҙы сағыштырыу теге йәки был уҡыу йортоноң һөҙөмтәлелеген асыҡ күрһәтә. Мәктәптәрҙең эшмәкәрлегенә бөгөнгөсә баһа биреү - тәжрибә үткәрелеүҙән, уҡытыусыларҙың "үҫешкән технологияларҙы" үҙләштереүенән, бик күп балаларҙың олимпиадалар еңеүсеһе булыуынан сығып, быйндай мәктәптәрҙең иң яҡшылары тип иҫәпләнеүе - абсурд.

| ЯҠШЫ МӘКТӘП | НАСАР МӘКТӘП |
|---|---|
| Юғары синыф уҡыусылары тәмәке тартмай | Юғары синыф уҡыусылары бәҙрәфтә йәки мәктәп тупһаһы алдындағы баҫҡыста тәмәке тарта |
| Ашханаларҙа сират ҡәтғи һаҡлана | Ашханаларҙа сират һаҡланмай йәки бер нисә сират бар: көс һәм “олатайлыҡ” ҡануны ғәмәлдә |
| Бәҙрәфтәрҙә таҙалыҡ хөкөм һөрә | Бәҙрәф стеналары һүгенеү һәм башҡа яҙыуҙар менән тулған |
| Дөйөм уҡыусылар һанына ҡарата 5-11-се синыф уҡыусылары араһында матур яҙыулы уҡыусылар нисбәте 8:10 тәшкил итә | Дөйөм уҡыусылар һанына ҡарата 5-11-се синыф уҡыусылары араһында матур яҙыулы уҡыусылар нисбәте 6:10 күрһәткесенән түбән |
| Тәфәнес ваҡытында уҡыусылар йылмайып, бер-береһен хөрмәтләп, күҙҙәренә тура ҡарап һөйләшә; телмәрҙәрендә кемделер кәмһетеү һүҙҙәре юҡ | Тәнәфес ваҡытында уҡыусылар өҙөк-йыртыҡ йәки тауышын күтәреп һөйләшә; бик йыш “блин”, “козел”, “дебил”, “урод” һ.б. һүҙҙәр ҡуллана |
| Кейемдәре бөхтә; ҡыҙҙар косметика ҡулланмай, уртаса оҙонлоҡтағы итәктәрҙә йөрөйҙәр, малайҙар — костюмда | Уҡыусылар сағыу төҫтәрҙә кейенә, ҡыҙҙар саманан артыҡ биҙәнә, егеттәрҙең сәсе оҙон һәм йыуылмаған, улар боҙбармаҡ кеүек һалынып тора |
| Уҡыусылар өйгә эштәрен үҙ аллы эшләй | Ололар ҡатнашлығынан тыш уҡыусылар өйгә эштәрен үҙ аллы эшләй алмай |

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**философия фәндәре докторы.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## "Мега тормош". 30 көнлөк программа

### Өсөнсө көн

**Өсөнсө бүлек: характер. Шәхси уңышығыҙ журналы**

Тормошоғоҙҙо ысын шедевр итергә ҡарар иттегеҙ. Хәҙер көндәлек ҡаҙаныштарығыҙҙы, идеяларығыҙҙы һәм проблемаларығыҙҙы яҙып барырға кәрәк. Яҙыуҙың, көндәлек алып барыуҙың үҙ мөғжизәһе бар. Ҡағыҙға төшкән уйҙарығыҙ һәм маҡсаттарығыҙ асығыраҡ була бара, ә пландарығыҙ көслө теләккә әйләнә.

Бының өсөн һеҙгә артыҡ сығымдар ҙа кәрәкмәй - ябай блокнот менән ручка ла етә. Яҙмаларығыҙҙы көн һайын алып барырға тырышығыҙ, әммә бер-ике көндө үткәреп ебәрһәгеҙ ҙә юҡҡа борсолмағыҙ. Идеяның мөһимлеге шунда -уйҙарығыҙҙы һәм проблемаларығыҙҙы нисек хәл итеүегеҙҙе планлаштырыуығыҙ мөһим. Көндәлек алып барыу тыныслыҡлыҡ менән көрәштең иң таралған ысулдарының береһе. Әгәр проблеманы журналға яҙһаң, ул даими рәүештә башығыҙҙа әйләнеүҙән туҡтаясаҡ. Проблема билдәләнгәс, асыҡланғас, башҡаларҙан айырымланғас, уны хәл итеүҙең аныҡ планын төҙөргә мөмкин. Шул уҡ ваҡытта һеҙҙең еңеүгә көйләнешегеҙ мыҫҡалға ла кәмемәйәсәк.

### Дүртенсе көн.

**Беренсе бүлек. Аҡыл. Үҙ-үҙеңде инандырыу һәм хыялды формалаштырыу**

Үҙ-үҙеңде инандырыу камиллашыу юлында иң төп сара булырға тейеш. Уның быуаттар менән иҫәпләнгән ысулдарын ҡулланып, үҙ-үҙенә ышанмаусыларҙың барыһы ла тиҙҙән - ышаныслы, дәрте булмаусылар дәрткә эйә буласаҡ, матди етешһеҙлек проблемаһы менән интегеүселәр матди байлығын арттыра аласаҡ. Үҙ-үҙеңде инандырыу - ябай процесс һәм уның өсөн ике этаплы формуланан тыш бер нәмә лә кәрәкмәй.

а) өлгәшергә теләгән маҡсатығыҙҙы яҙып ҡуйығыҙ (ул теләһә нәмә: үҙ-үҙеңә ышаныс булдырыуҙан алып 10 миллион доллар эшләү булыуы мөмкин). Маҡсатығыҙ асыҡ һәм аныҡ билдәләнгәнлегенә инанығыҙ.

б) маҡсатығыҙҙы ҡысҡырып, көн дауамында мөмкин тиклем йышыраҡ, әммә иртән йоҡонан уяныу менән һәм кисен йоҡлар алдынан мотлаҡ рәүештә ҡабатлағыҙ. Үҙегеҙҙе уның һис шикһеҙ тормошҡа ашырына ышандырығыҙ. Аныҡ билдәләнгән маҡсат, ныҡлы теләккә әүерелгәнгә тиклем көн һайын ҡабатланырға, уның тормошҡа ашырына ныҡлы ышаныс менән берләшеп, ысынбарлыҡҡа әүерелергә тейеш. Әгәр бөгөнгө хәл-торошоғоҙ күҙлегенән ҡарағанда уны тормошҡа ашырыу мөмкин кеүек күренмәһә лә, борсолмағыҙ. Бары тик үҙегеҙҙең алдығыҙға алған ниәтегеҙҙә ныҡ тороғоҙ һәм ошо формуланан ситкә тайпылмағыҙ. Аңығыҙ үҙе уны тормошҡа ашырыуға уңайлы мөмкинлектәр тыуҙырыр һәм һөҙөмтәгә килтерер.

**Робин ШАРМА.**



## ПОНЕДЕЛЬНИК 5 АВГУСТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 "Новости".
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор".
12.00 "Новости".
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!"
13.45 "Истина где-то рядом". (16+)
14.00 "Другие новости".
14.25 "Понять. Простить". (12+)
15.00 "Новости"
15.15 "Женский доктор".
16.10 "Последний герой". (16+)
18.00 "Вечерние новости".
18.20 "Трое в Коми". Комедия. (16+)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят". (16+)
21.00 "Время".
21.30 "Серафима прекрасная". Драма. (16+)
23.30 "Следствие по телу". (12+)
02.25 "Маленькие секреты". Трагикомедия.(16+)
03.00 "Новости"
03.30 "Элементарно". Детектив. (16+)
04.20 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00 "Утро России".
06.35 "Местное время. Вести-Башкортостан".
09.00 "1000 мелочей". Ток-шоу.
09.45 "О самом главном". Ток-шоу.
10.30 "Кулагин и партнеры". (12+)
11.00 "Вести".
11.25 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". "Заложники". (12+)
13.00 "Особый случай". (12+)
14.00 "Вести".
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Тайны института благородных девиц".
16.00 "Всегда говори "Всегда". Драма. (12+)
17.00 "Вести".
17.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
18.30 "Прямой эфир". (12+)
20.00 "Вести".
20.45 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Марьина роща". (12+)
00.35 "Вести+".
01.00 "Морпехи". (12+)
02.55 "Закон и порядок-17". (16+)

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Яҙмыштар туҡталышында". Фильм-концерт (0+)
08.50 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.30 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.50 "Замандаштар". Имам Хатиб (6+)
10.30 "Башҡортостандың ете мөғжизәһе". "Ағиҙел" (6+)
10.55 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.30 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.45 "Наза". Башҡорт халыҡ бейеүҙәре (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Кош юлы". Мәғфирә Ғәлиева (6+)
15.00 "Был тылсымлы донъя". Гөлсөм Бикбулатова (12+)
19.00 "Йондоҙло сәғәт". Нәркәс Сиражетдинова (6+)
21.00 "Тағы ла һөйөү хаҡында". Әлфиә Юлсурина (12+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм!" (12+)**
**10.00, 11.30 "Новости недели".**
**10.30 "Семәр".**
**10.45 "Городок АЮЯ". (0+)**
**11.00 "Замандаштар". (6+)**
**11.15, 17.15 "Орнамент". (0+)**
**12. 00 Ура, каникулы!**
**12.30 "Учим башкирский язык!" (0+)**
**12.45 "Весело живем". (12+)**
**13.00 "Уңган килен". Лучшее (16+)**
**13.30, 19.30, 00.30 "Новости" (на баш яз.).**
**13.45 "Мелодии души". (12+)**
**14.45 "Авограф". (6+)**
**15.15 "Царь горы". (0+)**
**15.30 "Гора новостей". (0+)**
**15.45 "Байтус". (6+)**
**16.00 "Бауырһаҡ".**
**16.15 "Учим башкирский язык!" (0+)**
**16.45 "Дорога к храму". (0+)**
**17.30 "Замандаштар". (6+)**
**17.55 Кубок ХК "Салават Юлаев-2013". Итоги.**
**20.30 "Телецентр". (12+)**
